ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 ноябрь (ҡырпағай) 2020

№45 (931)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

**_Белем күңел күҙен аса, наҙанлыҡты, ҡараңғылыҡты бөтөрә, оло дәрәжәләргә тоташтыра, дошмандарға ҡаршы ҡорал була. Тормошто һаҡлай, донъя көтөү сәбәптәрен белдерә, йорт эсендә һәм, ғөмүмән, кешеләр менән нисек булырға кәрәк икәнде өйрәтә. Белем ғалимдарҙың зиннәте, кешеләрҙең хөрмәте була. Белем урланыуынан ҡурҡылмаған мөлкәт, бөтмәй торған байлыҡ ул._**

**_Ризаитдин нәсихәттәренән._**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Башҡорт байыһа... бисә аламы? 7



Бәхетлеләргә... ел дә ыңғай исә 8



Атта ла, тәртәлә лә... 10



Тарихы шулай 12-13



ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Телефон, интернет аша ла алдашыуҙар йышайҙы. Бындай осраҡтарҙа үҙегеҙҙе нисек тоторға беләһегеҙме?

***Ғәлиә ҒӘНДӘЛИПОВА, хеҙмәткәр:*** Бик йәш тә, өлкән дә кеше түгелмен, тап тормош тәжрибәһе туплап, ул-был ваҡиғалар менән таныш, хәбәрҙар була торған мәлем дә бит, шундай йәшемдә лә хатта мине лә бер нисә тапҡыр төп башына ултырта яҙҙылар. Шул телефон, интернет аша, йә булмаһа өйгә килеп кеше алдап йөрөүселәр хаҡында һүҙем. Бер көн шулай ҙур, яңы карауат һатып алғас, иҫкеһен (ә ул барыбер өр-яңы, яҡшы торошта булғас, ташлауы йәл, тип) Авито иғландар сайтына белдереү элдем. Бер көн дә үтмәне, Нефтекаманан тип бер ир-егет шылтырата: иртәгә транспорт табып барып алам, бөгөн түләп ҡуяйым, картағыҙҙың номерын әйтегеҙ, ти был. Мин ни, һатып алыусы булғанға ҡыуанысымдан уны-быны уйлап тормаҫтан, тот та номерҙы әйт тегегә. Телефонды һүндереүем булды, "келт" итеп ошолай алданып һемәйгән кешеләр иҫкә төштө. Етмәһә, минең һөйләшеүҙе белеп ҡалған өйҙәгеләрем битәрләй башланы: картаңдағы аҡсаң менән хушлаш, былай булғас, тип. Ҡот китте. Тиҙ генә Һаҡлыҡ банкының ҡыҙыу бәйләнешенә шылтырата һалып, картамды яптырырға тура килде. Иртәгәһенә банктың үҙенә барып, яңы карта эшләтеп алдым инде. Шул хәлдән һуң хәҙер телефон, ватсап бәйләнештәр аша бер ниндәй артыҡ мәғлүмәт бирмәйем, таныш түгел телефон һандары һәм кешеләр менән һөйләшеп бармайым. Өйҙәгеләремде лә иҫкәртеп кенә торам. Ә шулай ҙа, ишектән ҡыуһаң, тәҙрәнән инә, тигәндәй, барыбер шул әрһеҙҙәр ауына эләгергә генә торабаҙ шул. Беҙ эштә саҡта шулай бер көн әсәйем өйгә газ хеҙмәте кешеләрен индереп, 6 мең аҡса түләп сығарған. Дөрөҫ, улар үҙҙәренең эшен эшләгән: газ хисаплау приборы иҫкергәйне, шуны яңыға алыштырып ҡуйғандар, тик үҙҙәренең "Горгаз" хужалығынан түгел, ә шәхси компаниянан икәнлектәрен әйтмәгәндәр, сөнки улар, асыҡланыуынса, хаҡты ике тапҡырға ҡиммәт түләтә булып сыҡты. Етмәһә, шундай әрһеҙҙәр. Әсәйем әйтеүенсә, ул ишек ҡыңғырауына яуап бирмәгәс, ишек дөмбәҫләй башлағандар, шуға өлкән кеше ҡурҡышынан ишек асырға мәжбүр булған: улай ныҡышҡас, янғын сыҡҡандыр, тип уйлаған. Ярай әле, приборҙы алмаштырған да сығып киткән улар - улым лекциянан ҡайтҡан, юғиһә, кем белә уларҙың уйындағын. Күпме кешене иҫәңгерәтеп, фатирын талап сығалар бит! Әсәйем дә хәҙер бер кемгә лә ишек асмаҫ булды. Таныш түгел кеше килһә йә телефондан шылтыратһа, ул тиҙ генә беҙгә был хаҡта хәбәр итә һәм быны ишетеп торған саҡырылмаған бәйләнсек "ҡунаҡтар"ҙан елдәр иҫә. Ғәҙәттә, әллә ниндәй христиан-православный текстар яҙылған буклет-листовкалар таратып йөрөүсе яулыҡлы, оҙон күлдәкле ҡатын-ҡыҙ эйәләште бер заман беҙҙең подъезда. Танауҙары дөрөҫ һиҙә: беҙҙең йортта өлкән йәштәгеләр күп йәшәй. Кеше эшкә китеп бөткәс, пенсионерҙарҙың ышанысына өмөт бағлап, ишек һайын ҡыңғырауға баҫып, астырып, юҡ-бар хәбәр менән албырғатып йөрөй икән былар. Торлаҡ советының подъезд буйынса өлкән яуаплыһы уҫал бер ҡатын ине, әрләп сығарған шулай бер көн тегеләрҙе. Шунан бирле улар беҙгә килгәне юҡ. Бының менән нимә әйтергә теләйем: бер йортта, подъезда йәшәүселәр шундай-бындай хәлдәргә иғтибарлыраҡ булһын, бер-береһен хәстәрләһен, шикле әҙәмдәргә әлегесә отпор бирә белһен ине. Шул саҡ алдаҡсылар һәм енәйәтселәр йортоғоҙға яҡын юламаҫ.

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Ошондай бер риүәйәт бар: "Бер ҡарт балыҡ ҡармаҡлай. Икенсе бер балыҡсы был ҡарттың ҡылығын иҫе китеп күҙәтеп тора: ҡарт ваҡ балыҡтарҙы ғына алып ҡала ла, эрерәктәрен һыуға ебәрә икән. Үҙенең был ҡылығын ул шулай аңлата: "Өйөмдә табам бәләкәй, эре балыҡтар унда һыймай". Һығымта шундай: аҡылыма һыймай, аңламайым, тип, тапҡыр аҡылды, урынлы кәңәште инҡар итмәйек, уларҙы аңыбыҙға һеңдерергә, йәшәйешебеҙҙә ҡулланырға тырышайыҡ. "Киске Өфө" гәзите лә уҡыусыларын шуға саҡыра. Шуға ла аҡ ҡағыҙ битен халҡыбыҙға файҙалы тос һүҙ, фекер менән тултырыу маҡсатын алға һөргәнбеҙ. Бөгөнгө көндөң иң актуаль мәсьәләһен - тәрбиә, рухиәтебеҙҙе сәләмәтләндереү йүнәлешен өҫтөн күреүебеҙ. Ошондай баҫманы үҙ итеүселәрҙе гәзитебеҙ менән дуҫлығын дауам итергә саҡырабыҙ.**

(Дауамы 2-се биттә).



## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

(Башы 1-се биттә).

**Шулай итеп, әлеге мәлдә республиканың һәр ауылында һәм ҡалаһында 2021 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара.**

● Бөгөн, бөтә донъяны тетрәткән коронавирус ваҡиғалары мәлендә, был сараны ойоштороу, үткәреү бик үк еңелдән түгел икәнен белеп-һиҙеп торабыҙҙыр. Шуға ла ҡайта-ҡайта мөрәжәғәт итәбеҙ уҡыусыларыбыҙға: 2021 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, тиражыбыҙҙы лайыҡлы кимәлдә тоторға ярҙам итһәгеҙ ине. Алты айға яҙылыу хаҡы 725 һум 58 тин.

● Гәзит уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, был йолабыҙ был юлы ла дауам итә. Быға саҡлы бындай бүләктәрҙе алыу бәхете тәтемәгәндәрҙән гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын көтөп ҡалабыҙ.

● Почтальондарға бик тә рәхмәтлебеҙ, улар үҙ эшен эшләй, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын тарата. Шуға ла бар ышанысыбыҙ, өмөтөбөҙ - почта хеҙмәткәрҙәрендә һәм... уларҙы өйҙәрендә ҡабул итеп, гәзитебеҙгә яҙылыу ғәмәлен атҡарыусы аңлы милләттәштәребеҙҙә. Әйткәндәй, гәзитте әүҙем таратыусы почтальондарға ла ошондай матур бүләктәр әҙерләйбеҙ.



**Әйҙәгеҙ, гәзитебеҙгә яҙылып, дуҫлығыбыҙҙы, берҙәмлегебеҙҙе нығытайыҡ!**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Телефон, интернет аша ла алдашыуҙар йышайҙы. Бындай осраҡтарҙа үҙегеҙҙе нисек тоторға беләһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

***Илдар ӘХМӘТШИН, "Билайн" элемтә салоны менеджеры:*** Кеше алдауҙар быға тиклем дә бар ине, ләкин коронавирус пандемияһы башланғас, бындай хәлдәр уғата әүҙемләшеп китте. Муттар йәмғиәттәге теге йәки был үҙгәрештәргә бик һиҙгерҙәр һәм үҙ шөғөлдәрен шул йүнәлешкә бик тиҙ бороп ебәрә алалар. Уларҙы кеше яҙмышы ла, ауырыуҙарҙың хәле лә борсомай, фәҡәт үҙҙәренең кеҫә яғын ғына ҡайғырталар. Мәҫәлән, һуңғы осор вирусҡа ҡаршы саралар, йәғни һауа таҙартҡыс приборҙар, фильтрлы битлектәр, респираторҙар һәм хатта сиргә йоғонтоһо билдәһеҙ булған дарыу препараттарын ҡиммәт хаҡҡа тәҡдим итеп йөрөүҙәр башланды. Үкенескә, уны һатып алырға йөрьәт итеүселәре лә табылып тора, әйтәгүр. Белеүемсә, вирустан шәхси һаҡланыу саралары өсөн аҡсаны алдан түләп һемәйеүселәр ҙә байтаҡ икән. Бергә эшләгән егеттең ковид-госпиталдән дауаланып сыҡҡан әсәһенә, мәҫәлән, пандемиянан күргән зыян өсөн дәүләт ярҙамы - компенсация түләү һылтауы менән социаль яҡлау органы исеменән уның шәхси мәғлүмәттәрен һорап шылтыратҡандар. Ярай әле, был хаҡта дуҫым белеп ҡалған һәм әсәһен ваҡытында иҫкәртеп өлгөргән. Икенсе бер таныштарға тест эшләйбеҙ, пневмониянан прививка яһайбыҙ, дезинфекция үткәрәбеҙ, тип өйҙәренә килеп йөрөгәндәр хатта. Әлбиттә, бындай саҡта таныш түгел бер кемде лә өйгә индерергә ярамағанын өй хужалары яҡшы белгән һәм полицияға хәбәр итеү менән янап, ҡыуып ебәргәндәр. Әҙәм ышанмаҫтай тағы бер хәлде һөйләп аптыраттылар. Тик ысын булғанмылыр ул, әллә кешеләрҙе шулай ҡурҡытып иҫкәртеү ысулы ғына булдымы - билдәһеҙ. Хәтерләһәгеҙ, пандемияның тәүге осорҙарында битлектәргә ҡытлыҡ булды. Шундай саҡта яңғыҙ йәшәгән кешенең ишеген астырып, битлектәр, респираторҙар тәҡдим итеп йөрөгәндәр, тик ул әйберҙәр кешене иҫтән яҙҙыра торған химик матдә менән эшкәртелгән булған, имеш. Битлекте кейеп, үлсәп ҡарарға тәҡдим итеп, иҫтән яҙып йығылған пенсионерҙың фатирына үтеп инеп, ҡиммәтле әйберҙәрен урлап сыҡҡандар тип һөйләгәйнеләр. Булыуы бик ихтимал. Йәшерен-батырыны юҡ, өлкәндәрҙе алдауҙар хаҡында үткән йәй ветерандар менән осрашыуында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та ныҡ ҡына иҫкәртеп китеүҙе



кәрәк тапҡайны. Ҡыҫҡаһы, телефондан ят һәм шикле шылтыратыуҙар, смс-хәбәрҙәргә ышанмаҫҡа, ә кәрәкле кешегеҙгә, яҡындарығыҙға үҙегеҙ шылтыратып, хәлдең айышына төшөнөргә тейешлекте хәҙер күптәр аңлағандыр инде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, телефон аша эш итергә оҫтарған мошенниктар ҡат-ҡат шылтыратып та, абоненттың яуап биргәнен дә көтмәй, трубканы ташлап ҡуялар. Кемдер ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса, әлеге номерға ҡайтарып шылтыратыуы ихтимал һәм шул уйланмаған аҙымы менән алдаҡсыларҙың базаһына килеп тә эләгә, сөнки улар тарафынан бындай ҡыҫҡа "дозвон"дар теге йәки был номерҙың ғәмәлдә булыу-булмауын асыҡлау маҡсатында автоматлаштырылған системанан алып барыла. Шуға күрә, ундай сигналдарға яуап бирмәҫкә, йә трубканы алған хәлдә лә үҙеңә башлап бер нәмә лә өндәшмәҫкә кәрәк, шул саҡ һеҙҙең номер "тере" абонент булараҡ, әлеге базаға инмәй ҡалыуы ла бар. Ә инде өндәшә ҡалһағыҙ, банкка шылтыратыу өсөн биометрик идентификация рәүешендә тауышығыҙҙы яҙҙырып алыуҙары бар. Ә инде үҙегеҙ клиенты булып торған банктың шылтыратыуына яуап бирә алмауығыҙ өсөн көйөнмәгеҙ: банк, һәр хәлдә, шылтыратыу менән генә сикләнмәй, ә мөрәжәғәтен дөрөҫләп, һеҙгә смс-хәбәр ҙә ебәрәсәк. Һеҙҙең банк картағыҙ буйынса шикле йәнләнеүҙәрҙе лә иғтибарҙан ситтә ҡалдырмаясаҡ, һеҙҙән яуап алмаған хәлдә лә бындай осраҡта иҫәбегеҙҙе хәүефхәтәрҙән ҡурсып, "бикләп" тә ҡуя ала.

***Азамат АЙЫТҠОЛОВ, банк хеҙмәткәре:*** Һуңғы ваҡыт енәйәтселәр яңы схема ҡуллана башланы. Банк клиенттары был хаҡта хәбәрҙар булырға тейеш, тип уйлайым. Әгәр һеҙҙең телефонға шылтыратып, үҙҙәрен "прокуратура вәкилдәре" тип таныштыралар икән, тимәк, һеҙ тап ана шундай алдаҡсыға тап булғанһығыҙ, тип уйларға һәм шикләнергә урын бар. Быйыл "прокуратура"нан ана шундай алдаҡ шылтыратыуҙар һаны ике тапҡырға артты. Алдашыу юлы менән кеше аҡсаһын кеҫәгә һалыу өсөн ниндәй генә хәйлә ҡормай енәйәтселәр! Ә бит оҫталыҡтарын камиллаштырыуҙы арттыра ғына баралар, уларҙың айышына төшөнөп өлгөр генә. Әлеге "прокуратура" кешеләре туранан-тура банк хеҙмәткәрҙәрен дә йонсота башланы: йәнәһе, теге йәки был хеҙмәткәрҙең мутлыҡтары асылыу сәбәпле, уға ҡарата тикшереү эштәре бара. Шунлыҡтан, мошенниктар банк клиенттарына ла әлеге хеҙмәткәрҙең мутлығын тикшереп ҡарар өсөн билдәле бер иҫәпкә күпмелер күләмдә аҡса күсерергә тәҡдим итеп шылтырата башлай. Йәнәһе, был банктың намыҫлы эшләйме-юҡмы икәнен тикшереү өсөн кәрәк. Ошондай әкиәткә ышаныусылар кире ҡайтарып алыу шарты менән әлеге иҫәпкә аҡса күсерә һәм алдана. Банк клиенттарына бындай һөжүм хаҡында йыл башынан алып 3 миллионға яҡын ялыу теркәлгән, был былтырғыға ҡарағанда ике тапҡырға күберәк. Теге йәки был клиенттың "Онлайн Һаҡлыҡ Банкы" ҡушымтаһын боҙоп инеп, мошенниктар уның иҫәбенән байтаҡ ҡына аҡса сәлдерәләр. Банктың хәүефһеҙлек хеҙмәте тарафынан ана шундай 80 осраҡ теркәлгән дә инде. Банк клиенттарын алдауҙың тағы бер төрө - банктың "хәүефһеҙлек хеҙмәте" исеменән шылтыратыуҙар. Яңыраҡ ҡына шулай 64 йәшлек Өфө кешеһенең енәйәтселәргә күп уйлап та тормай 350 мең һум аҡсаһын күсереүе хаҡында яҙып сыҡтылар. Уның схемаһы шундай: "хәүефһеҙлек хеҙмәте"нән шылтыратып, пенсионерҙың картаһына кемдәрҙендер инеүҙәре һәм ундағы аҡсаны алырға маташыуҙары хаҡында хәбәр итеп, бөтөн аҡсаһын хәүефһеҙ махсус иҫәпкә - йәнәһе, резерв иҫәпкә күсерергә тәҡдим итәләр. Әйткәндәй, алдаусылар үҙ ҡорбанының исемен, атаһының исемен, адресын да беләләр, ләкин был уларға ышанырға нигеҙ була алмай әле. Персональ мәғлүмәттәрҙе лә белеүҙәре бар. Шуға күрә бындай осраҡтарҙа кисекмәҫтән банктың контакт үҙәгенә шылтыратырға ашығығыҙ. Уның номеры банк картағыҙҙың артында яҙылған. Ғөмүмән, алдашыу ҡорбаны булырға теләмәһәгеҙ, был хаҡта күберәк хәбәрҙар булыу кәрәк. Интернетта "һаҡ булығыҙ: мошенниктар!" тигән рубрика менән интернет һәм телефон алдаҡсылары хаҡында бик күп мәҡәлә, плакат-листовкалар, инфографикалар һәм хатта һүрәтле аңлатмалар бирелә - бөтәһе лә һеҙҙең финанс именлеге хаҡына. Табып уҡығыҙ һәм тормошта файҙаланығыҙ, шул саҡ һеҙҙе алдай алмаҫтар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Коронавирус пандемияһы башланғандан алып Башҡортостанда 57 кеше вафат булған. Һуңғы тәүлектә ауырыу йоҡтороуҙың 96 осрағы асыҡланған. Сирлеләрҙең дөйөм һаны - 11 244. Хәҙерге ваҡытта 863 пациент яңы коронавирус инфекцияһынан дауалана. Уларҙың күпселеге - өйөндә.

✓Башҡортостан властары республиканың дәүләт һәм халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү программаһына 3,74 миллиард һум йүнәлтә. Дәүләт программаһы 2019-2024 йылдарға иҫәпләнгән. Программаға үҙгәрештәр Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған Хөкүмәт ҡарарында сағылған. Документҡа ярашлы, дәүләт программаһы рус телен төрлө яҡлап үҫтереүгә булышлыҡ итергә, башҡорт телен ҡулланыу даирәһен киңәйтергә, уны республиканан ситтә үҫтереүгә һәм һаҡлауға ярҙам итергә, шулай уҡ Башҡортостан халыҡтарының туған телдәрен һаҡларға һәм үҫтерергә тейеш.

✓Фәнүр Йәғәфәров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығын, "Башҡортостан Республикаһы" нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһын, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһын берләштергән медиахолдинг етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Был ҡарар Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте "Башинформ" акционер йәмғиәтен артабан үҫтереү тураһында" бойороғон үтәү юҫығында ҡабул ителде.

✓Башҡортостан властары "Газпром" йәмғиәте менән киләһе биш йылда газ үткәреү өсөн килешеү төҙөнө, тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Монополистың республикаға инвестиция күләме алты тапҡырға тиерлек артып, 13,4 миллиард һум тәшкил итә. "Был - халыҡ өсөн һиҙелерлек ярҙам, әле байтаҡ ауылдар газһыҙ йәшәй. Муниципалитет башлыҡтарынан ер участкалары, эштәрҙе ойоштороу буйынса үтенестәргә ҡолаҡ һалыуҙарын һорайым", - тине республика етәксеһе.

✓Рәсәйҙә өс аҙнанан COVID-19 менән сирләү осраҡтарының кәмей башлауы мөмкин, тип яҙа федераль киң мәғлүмәт саралары Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш инфекционист-табибы Владимир Чулановҡа һылтанма менән. Уның һүҙҙәренсә, был юлы күтәрелеш бик оҙаҡ дауам итмәй, өс аҙнанан хәл тотороҡлана башлай. Профессор фекеренсә, илдең һаулыҡ һаҡлау системаһы коронавирус йоҡторғандарҙың артыуына ҡаршы торорға һәләтле, сөнки яҙ көнө эпидемия менән көрәшеү өсөн тейешле тәжрибә тупланды.

***✓ Тираждарыбыҙ кәмей барыуына үҙебеҙҙекеләр үк ҡул сабып, тамаша ҡылып тороусылар барҙа, әлбиттә, башҡорт теленә лә һан бөтә бара. Бөгөн беҙгә тарҡалыш, тырым-тырағайлыҡ түгел, ә берҙәмлек кәрәк.***

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Бөгөн һәммәһе: ултырғаны, шыуғаны, имгәкләгәне - кескәйҙәрҙән алып йәше-ҡартына тиклем интернет донъяһына ябырылды. Сүллектә килеп, ниһайәт, ҡоҙоҡҡа юлыҡҡан юлаусылар каруаны кеүек. Нимәләр генә яҙышмайҙар бында: булғанын-юҡ-барын, ғәжәбен-ғибрәттәрен-ғәйбәттәрен: кемдең кемде һөйөүен, кемдәрҙең айырылышыу-талашыуын, кемгә ниндәй үсе барын - барыһын һыйҙыра, үҙенә йота төпһеҙ ҡойо.**

# ГӘЗИТ КЕМДЕКЕ ҺУҢ УЛ,

## йәки Ҡағыҙ баҫмаларҙы уҡымағандар ниҙән мәхрүм?



Был юҫыҡта "Бәйләнештә" селтәре күҙҙә тотолоуын төшөнөргә булалыр. Ә ғөмүмән, интернеттың теге йә был өлкә, тема буйынса белешмә туплау,махсус материалдар, мәҡәлә һәм монографиялар менән танышыу, белем алыу һәм донъяға ҡарашыңды киңәйтеү буйынса алыштырғыһыҙ мәғлүмәт һәм белем сығанағы, глобаль портал икәнлеген һәм әһәмиәтен бер кем дә инҡар итмәй. Ләкин әлеге һүҙгә, хәбәр тейешеүгә һыуһаған обыватель әҙәмдәр мәғлүмәт-белем порталдарын асып та ҡарамауы ихтимал. Уларға аралашыу - бәйләнеш кәрәк, улар күберәк гәп һатыу, бәхәсләшеү, ил-йорт хәлдәрен белеп тороу һәм һәр нәмәгә үҙ ҡарашын белдереү өсөн файҙалана интернетты. Һәм әйҙә, яҙыша, аралаша бирһендәр, тик йыш ҡына (ошо урында ғәфү үтенергә кәрәктер) йыуынты һыуҙы хәтерләтеп ҡуйған ҡайһы бер тәрбиәһеҙ, шаҡшы телле постар, комменттарҙан үҙҙәре үк ҡасандыр бер бүгеп, туйыуҙары ихтималлығын да онотмаһындар. Бөтөн көтөүҙе буяу өсөн бер шаҡшылыҡ та етә бит, ә бында ундайҙар берәү-икәү генә лә түгел һәм башына нимә тура килә, шуны яҙып, көн үткәреп, даими "штатта" ултырыусылар төркөмө барлыҡҡа килгән. Үкенескә, ҡайһы саҡ теләһәң-теләмәһәң дә бына ошо мөхиткә сумып сығырға тура килгеләй: журналист ғәҙәте - кәрәккән-кәрәкмәгән менән ҡыҙыҡһынып, юҡ-бар ергә танау тығып йөрөү. Икенсе яҡтан, сер түгел: гәзит-журналдарыбыҙҙың потенциаль уҡыусылары, штаттан тыш хәбәрселәребеҙ - барыһы ла ошо виртуаль донъяға күсеп бөттө. Шулар араһынан хәҙер эҙләп ултыр инде "алтын" бөртөктәрҙе. Ә ундайҙар байтаҡ был донъяла: ҡыҙыҡлы һәм төплө фекер әйтеп, уйындағыһын саф туған телебеҙҙә матур итеп яҙа, еткерә белгәндәр. Уларҙың үҙ төркөмдәре, үҙ уҡыусылары тупланып өлгөргән. Тик шулай ҙа бына ошондай яҙышырға һәләтле авторҙарҙың фекерҙәрен, энергияһын виртуаль бушлыҡ йотоп тормаһын ине лә бит. Юғиһә күңелде һыҙлатҡан теге йә был мәсьәлә хаҡында бәйләнештәге төркөмдәр, серҙәштәр, әхирәттәр, фекерҙәштәр ағас ҡыуышына башын тығып:"Хандың маңлайында мөгөҙө бар!"- тип ҡысҡырған әкиәт геройын хәтерләтеп ҡуя.

Үпкәләштән булмаһын, интернет мөмкинлектәрен яҙма матбуғаттан айырып ҡарап, уның әһәмиәтен кәмләргә йыйынған юҡ. Аш - ашҡа, урыны башҡа, тигәндәй, һәр икеһенең үҙ урыны, үҙ тәғәйенләнеше, үҙ уҡыусылары һәм авторҙары. Һуңғыларының исемдәрен матбуғат баҫмаларында ла күргеге, мәҡәләләренең ташҡа баҫылғанын уҡығы килә. Шул ыңғайҙан бәйләнеш төркөмдәрендә сығыш яһаусылар иғтибарын әсә телебеҙҙә нәшер ителгән гәзит-журнал эшенә йәлеп итеү теләге ҡайһы саҡ тупаҫ агрессия тулҡынына осрап та ҡуя. Был әлеге виртуаль төркөмсөләрҙең, ни әйтһәм дә хаҡым бар, тигән ҡараштан сығып, интернет иреклегенән файҙаланыу ләззәтен тойоуымы әллә аноним-псевдонимдар артына йәшеренеп, ҡурҡыу тойғоһонан азат булыуымы, бәйһеҙлегеме - һәр хәлдә бер ниндәй әҙәп һаҡлау ҡағиҙәләрен һанламай, гәзитең-ниең менән һине бер ултырыуҙа күмәк өйөр менән ботарлап ташлауҙары бар. Фекерен әйтергә һәр кем хаҡлы, тик ниңә шул ҡәҙәре агрессия, кәмһетеү, тупаҫлыҡ? Ҡайҙан килә ул? Бер нәмә аңлашыла шулай ҙа - ирекле донъяның да хатта үҙ сиктәре, үҙ ҡағиҙәләре була, тик уны аңлау кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Ә әлегә ул күпселектә юҡ кимәлендә: тәбиғи тәрбиәһеҙлек касафаты. Ә шулай ҙа, нимә генә тимәһендәр, ташҡа баҫылған - ул инде тере тарих сағылышы, ул йәмғәтселек фекерен туплаусы, халҡыбыҙҙың рухи һәм мәҙәни кимәле күрһәткесе һәм туған телебеҙҙе рәсми йәшәтеү сараһы. Дөрөҫ, әлеге виртуаль баҫмалар һәм сама тойғоһон юғалтҡан авторҙар һымаҡ, рәсми яҙма баҫмалар башына ни тура килә, шуны яҙып, ысынбарлығыбыҙға фәҡәт ҡоро тәнҡит һәм бөтөн яҡшы нәмәне инҡар итеү аша ҡарап, йыш ҡына кемделер кәмһетеү, яла яғыу юлы менән арзан популярлыҡ яулай, батыр булып күренә алмай, сөнки был беҙҙең юл һәм бигерәк тә маҡсат түгел, сөнки баҫма матбуғат - яңғыҙ бүре олоуы түгел, ә коллектив хеҙмәт емеше, ул объектив ысынбарлыҡ яҡлы. Эйе, беҙҙең ойоштороусыларыбыҙ бар, уларһыҙ гәзит тә йәшәмәйәсәк, сөнки нисек кенә һауаға талпынма - матди сынйыр ергә тарта, хаттин ашыуға юл ҡуймай. Шулай итеп, ойоштороусы күрһәтмәһенә буйһонорға ла тура килә, сөнки ҡыйыу күренәйек тип, үҙебеҙ ултырған ботаҡҡа үҙебеҙ балта саба алмайбыҙ. Ахыр сиктә, быларҙың бөтәһен дә үҙ телебеҙҙә сыҡҡан гәзитте рәсми йәшәтеү хаҡына ниндәйҙер компромисҡа барыу тип тә аңлатырға булалыр. Был бая әйткәнсә, кемдәргәлер батырлыҡ, ҡыйыулыҡ булып күренмәһә лә, һәр хәлдә башыңа ни тура килә, шуны ҡылыу түгел, ә һалҡын ҡанлылыҡ һәм күмәк аҡылды туплап эш итеү, яҙма телебеҙҙе һаҡлау, мәгәр бушлыҡҡа "ҡыйыу" хәбәрҙәр һатып ултырыу түгел. Үкенескә, юҡ-юҡта виртуаль төркөмдәрҙә яҙма матбуғат баҫмалары хаҡында һүҙ сығып китҡеләй һәм шунда ултырған бәғзе милләттәштәребеҙ үҙ телебеҙҙәге гәзит-журналдар хаҡында бөтөнләй сит-ят кешеләр кеүек битараф һәм хатта юғарынан түбәнгә ҡарабыраҡ фәлсәфә һата, кәмһетә башлай.

Әйткәндәй, яңыраҡ тап ана шундай гәп ояһына тап булынды. Оппозицион рухлы билдәле генә бер мөхтәрәм шәхесебеҙ (сәйәси-иҡтисади-хоҡуҡи ҡараштарының ихтирамға лайыҡ булыуын инҡар итмәйем) власть баҫымынан ҡурҡып, мәҡәләләремдә баҫмайҙар, ғөмүмән, урындағы матбуғат республикалағы хәлде дөрөҫ яҡтыртмай тигән үпкә белдереп, киләһе йылға башҡортса гәзит-журналға яҙылмаясағын хәбәр итеүе булды, ошо хаҡта бәйләнештә гәп ҡуйырҙы. Кемдер үҙенең башҡорт баҫмаларын бөтөнләй уҡымауы менән маҡтанды: унынса, матбуғат телевидениенан күрһәтелгәнде генә ҡабатлап яҙа, имеш. Икенсе бер маңҡорт гәзит-журналдарҙың киләсәге юҡ, тип, тулайым интернетҡа ҡапланырға кәңәш бирә. Сөнки, ти ул, гәзиттәр берәй мохтажды яҡлап, бер проблеманы ла хәл иткәндәре юҡ, йәнәһе. Был тәңгәлдә шул да мәғлүм булһын ки: мохтаждарға беҙҙә дәүләт, уның социаль яҡлау органдары ярҙам итә, ә гәзиттәр үҙҙәре ярҙамға мохтаж, хәйерсе хәлендә көн күрә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, власть органдарына ярайыҡ, тип түгел, ә туған телебеҙҙе йәшәтәйек, тарихыбыҙҙың онотолоуына юл ҡуймайыҡ, рухиәтебеҙ һәм мәҙәниәтебеҙҙе күтәрәйек тип тырышҡан көнөбөҙ. Ә бына ошо йәһәттән ярҙам итеү урынына ярҙан этеүселәр - гәзит-журналдарыбыҙ билдәле ҡатмарлыҡтарға, ауырлыҡтарға дусар ителеп, тираждарыбыҙ кәмей барыуына үҙебеҙҙекеләрҙән үк ҡул сабып, тамаша ҡылып тороусылар барҙа, әлбиттә, башҡорт теленә лә һан бөтә бара. Ваҡ-төйәк үпкә-дәғүәләр менән мауығып, урынлы-урынһыҙ ғәйеп ташлап, иң мөһим нәмәне күрмәй ундайҙар: бөгөн беҙгә тарҡалыш, тырым-тырағайлыҡ түгел, ә берҙәмлек кәрәк. Беҙ уның туплаусы, йәшәтеүсе көсөн тойҙоҡ, күрҙек инде, шөкөр. Тимәк, ҡалған бурыстарҙы атҡарыуҙа ла шул юлдан яҙлыҡмау фарыз - берҙәмлек юлынан барырға. Йәл, ләкин әлегә хәүеф-хәтәр һуңғы сиккә килтереп терәмәйенсә, беҙ күбеһенсә тырым-тырағай.

Ғөмүмән, бөгөн үҙ телебеҙҙәге гәзит-журналдарға яҙылыу мәсьәләһе журналистарҙан башҡа бер кемде лә борсомай. Бар,әлбиттә, йыл һайын гәзит алдырып уҡыусы тоғро дуҫтарыбыҙ ҙа, ләкин уларҙың сафы ла һирәгәйә бара: матбуғат баҫмаларына хаҡтар йыллап түгел, айлап үҫә, ә ябай халыҡтың килеме кәмей, эшһеҙлек арта. Ә инде ике ҡулыңа бер эш тә булмағанда, тыныс күңел менән гәзит уҡып ултырып та булмайҙыр. Аҙ килемле ғаиләләр, яңғыҙаҡ өлкәндәр - ветерандарҙы бушлай гәзиткә яҙҙырыу урындарҙағы бизнесмен-эшҡыуарҙар ҡулынан да килерлек, тик был хаҡта уйлаусы ғына юҡ. Матбуғат баҫмаларының ойоштороусылары була тороап та, хатта был хаҡта дәүләт органдарының да уйына ла инеп сыҡмай. Ә бит туған телебеҙҙе һаҡлау, үҫтереү, йәшәтеү бурысы иң тәүҙә дәүләт кимәлендәге мәсьәлә. Билдәле халыҡ мәҡәлен ил ҡаҡҡанды мир ҡаға тип бороборaҡ әйткәндә, гәзит-журналдарыбыҙҙың бөгөн тап ошо хәлдә - дәүләт тарафынан да, әүҙем йәмғәтселегебеҙ тарафынан да ситкә ҡағылыуын, онотола барыуын күрербеҙ. Тик был осраҡта кем отор ҙа, кем отолор икән?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика клиник психотерапия дауаханаһында психологик ярҙам күрһәтеү буйынса Берҙәм ышаныс телефоны эшләй. Психологтар һәм психотерапевтар медицина хеҙмәткәрҙәренең һөнәри зыян күреү билдәләрен һәм сәбәптәрен бөтөрөүгә йүнәлтелгән психологик ярҙам ойоштора. Ҡыҙыу элемтәгә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 9-ға тиклем шылтыратырға мөмкин. Консультация алыу өсөн телефон - 8 (347) 232-88-70.

✓Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, ата-әсә дауаханаға яткан һәм баланы ҡарарға кеше булмаған осраҡта, улар шәхсән йәки дауалаусы табип аша "Ғаилә" үҙәктәренә, социаль приютҡа йәки опека һәм попечителлек органына социаль хеҙмәттәр күрһәтеүгә ғариза менән мөрәжәғәт итә ала. Учреждениела баланы педагогтар һәм белгестәр күҙәтә. Ул алты тапҡыр туҡланыу, кейем-һалым менән тулыһынса дәүләт тәьминәтендә була, дәрестәргә йөрөй һәм туғандары, яҡындары менән бәйләнешкә сығыу мөмкинлегенә эйә.

✓Башҡортостан ҡала-райондарында 28 октябрҙән битлек режимын үтәү буйынса күләмле рейдтар башланды. Битлек киймәгән өсөн штраф күләме - 200 мең һумға тиклем. Башҡортостандың Йәмғәт хәүефһеҙлеге ведомство-ара советы мәғлүмәттәре буйынса, пандемия башланғандан һуң республикала битлек һәм изоляция режимын боҙған өсөн 14,4 мең кешегә штраф һалынған. Шуларҙың 12 меңе - Эске эштәр министрлығы, 2,4 меңе - республиканың дәүләт власы органдары яғынан. Бынан тыш, 20 мең предприятие һәм сауҙа нөктәһе тикшерелгән, уларға ҡарата административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында 279 эш ҡуҙғатылған, 60-тан ашыу протокол төҙөлгән.

✓Башҡортостанда торлаҡҡа хаҡ артыуы дауам итә, тип хәбәр итте республика статистиктары. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, өсөнсө кварталда республиканың беренсел баҙарында торлаҡтың бер квадрат метры уртаса 65,6 мең һумға еткән. Был 2020 йылдың икенсе кварталына ҡарағанда 0,9 процентҡа күберәк. Башҡортостанда "икенсел" торлаҡ арзаныраҡ - өсөнсө квартал йомғаҡтары буйынса бер квадрат метры өсөн уртаса 60,3 мең һум.

ҠЫҪҠАСА

# ВӘХШИЛЕК БИТ!

**Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуроры Әбйәлил районындағы 11 ҡарағасты бысып китеү тураһында эште тикшерә.** Бынан алда билдәһеҙ кешеләрҙең Башҡортостандың Әбйәлил районы Ҡужан ауылы янындағы уникаль ҡарағастарҙы бысыуҙары тураһында хәбәр билдәле булғайны. Ағастарҙың ҡабығы зыян күргән. Тәбиғәт ҡомарткыһы статусына эйә булған 11 ағас һәләк ителә яҙған. Урындағы халыҡ һүҙҙәренсә, ҡарағастарҙың йәше - 400 йыл тирәһе. Ошо 11 өлпәк ҡарағасты ҡотҡарыу өсөн аҡса бүленә, тип хәбәр итте Әбйәлил районы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Руслан Хәлилов. Әле полиция бысҡы менән үҙенсәлекле ҡарағастарҙы бысҡан гәйеплеләрҙе эҙләй.

✓ **Башҡортостанда республика бюджеты иҫәбенә ковидтан өйҙә дауаланған граждандарҙың льготаға эйә булған категорияларына бушлай дарыуҙар бирә башланылар.** Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин хәбәр итеүенсә, бушлай дарыуҙарҙы инвалидтар, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, тыл эшсәндәре, концлагерь тотҡондары, ҡамауҙа ҡалған Ленинградта йәшәгәндәр, хәрби хәрәкәт ветерандары, шулай уҡ Чернобыль һәләкәтендә ҡатнашҡандар алырға мөмкин. Әйтәйек, уҙған аҙнала уларға 700 рецепт яҙып бирелгән. Бынан тыш, республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы коронавирус йоҡторған һәм амбулатор йәки өйҙә дауаланған барлыҡ сирлеләр өсөн дарыуҙарға федераль аҡсаның килгәнен көтә. Билдәле булыуынса, төбәктәргә быйыл өсөн 5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленә.

✓ **Йәш ғаиләләргә торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн социаль түләүҙәр юллау күпкә ябайлаша.** Ошо хаҡтағы ҡарарға РФ Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. Хәҙер дәүләт ярҙамы алыу өсөн кәрәкле барлыҡ документтарҙы шәхсән генә түгел, Берҙәм дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр порталы аша ла бирергә мөмкин. Электрон документтарҙа ғаилә ағзаларының береһенең ябай электрон ҡултамғаһы торорға тейеш. Торлаҡ һатып алыу йәки төҙөү өсөн социаль түләүҙәр йәше 35-кә етмәгән ғаиләләргә тапшырыла. Балаларҙың булыуы мотлаҡ түгел. Бынан тыш, бер йәки унан күберәк бала тәрбиәләгән 35 йәшкә тиклемге яңғыҙ ата-әсә лә дәүләт ярҙамына хоҡуҡлы. Төп шарт - ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булырға тейеш. Түләүҙең күләме торлаҡ хаҡынан 30-35 процент тәшкил итә. Шулай уҡ ҡалған өлөшөн ҡапларға йәки кредитты түләргә мөмкинлек биргән килемде раҫларға кәрәк. Аҡсаны өй, яңы һалынған йортта фатир һатып алыу, шәхси торлаҡ төҙөү, шулай уҡ тәүге иғанә йәки ипотеканы түләп бөтөрөү өсөн тотонорға була.

✓ **Быйыл ҡыш Рәсәйҙә бер төрлө түгел, ләкин былтырғыға ҡарағанда һалҡыныраҡ була.** Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд ошондай фараз менән сығыш яһаны. Синоптиктар фекеренсә, быйыл ҡыш температура барыбер норманан юғары, әммә ситкә тайпылыуҙар аҙыраҡ була. Уҙған йылдағы ҡышты башлыса Атлантик океан өҫтөндә барлыҡҡа килгән йылы һауа массалары билдәләне. Улар Рәсәйҙең Европа өлөшөнә генә түгел, Уралға ла, Себергә лә үтеп инде. Синоптик һүҙҙәренсә, был юлы ҡышҡы һауа торошона бәйле хәл тулҡын кеүек була. Ләкин белгестәр һауа торошоноң төрләнгәнә ҡарамаҫтан, температура барыбер норманан юғары була тигән фекерҙә. Бынан алда "Фобос" һауа торошо үҙәгенең ғилми хеҙмәткәре Евгений Тишковец билдәләүенсә, ҡышҡы осорҙа температура нормаһынан артыҡ юғары күтәрелмәүе көтөлә, шуға күрә миҙгел йомшаҡ була. Уның һүҙҙәренсә, декабрҙә норманан 2,5-3°С, ә ғинуарҙа 3,5-4°С юғары булыуы көтөлә. Февралдә лә норманан 3°С юғары булыуы фаразлана.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАҠЛАНАЙЫҠ!



**Башҡортостан Башлығының яңы коронавирус инфекцияһы таралыу хәүефенә бәйле юғары әҙерлек тураһындағы указына үҙгәрештәр индерелде.**

Документта мотлаҡ коронавирусҡа анализ бирергә тейешлеләрҙең категориялары билдәләнгән. Улар - йөгөшло сир билдәләре менән Рәсәйгә килгәндәр, ауырыу йоҡторған кешеләр менән аралашҡандар, дауахананан тыш пневмония, грипп һәм ОРВИ диагнозы ҡуйылған сирлеләр. Шулай уҡ балалар йорттарында, төрмәләрҙә, ҡарттар йорттарында һалҡын тейҙереү билдәләре барлыҡҡа килгәндә, 65 йәштән өлкәндәр респиратор билдәләре менән мөрәжәғәт иткәндә яңы коронавирус инфекцияһына тест уҙғарыла. G иммуноглобулины барлыҡҡа килгәнсе аҙна һайын табиптарҙы һәм шәфҡәт туташтарын тикшереү ойошторола. Социаль учреждение хеҙмәткәрҙәре вахта ысулы менән эшләгәндә смена башланыр алдынан анализ бирергә тейеш.

2 ноябрҙән юғары уҡыу йорттарында бер уҡ ваҡытта көндөҙгө һәм дистанцияны уҡытыу башланды. Сығарылыш курстары уҡыу йортона йөрөй, ә ҡалғандар өйҙән белем алыуын дауам итә. Вуздар студенттарға өйҙән һәм электрон форматтарҙы файҙаланып уҡырға тейешле йүнәлештәр исемлеген билдәләргә тейеш. Республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, көн һайын юғары уҡыу йорттарында студенттар һәм уҡытыусылар араһында 30-50 сирле теркәлә. Урта махсус уҡыу йорттарында ауырыу йоҡторғандар күп түгел, шуға күрә колледж-техникум студенттары гәҙәттәгесә уҡыуын дауам итә.

# ӨФӨ ҠӘЛҒӘҺЕНӘ - 450 ЙЫЛ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2024 йылда Өфө ҡәлғәһе төҙөлөүҙең 450 йыллығын үткәреүгә әҙерлек буйынса онлайн-кәңәшмә үткәрҙе.**

Ҡаланың үҫеш программаһы менән М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының "Мәҙәниәт иҡтисадын, ҡала үҫешен һәм креатив индустрияны тикшереү үҙәге" ғилми-ғәмәли лабораторияһы мөдире Сергей Капков таныштырҙы. Был документ 24 йәмәғәт киңлеген төҙөкләндереүҙе, тарихи биналарҙы реставрациялауҙы, яңы социаль объекттар төҙөүҙе, Ағиҙел йылғаһының яр буйын үҫтереү, яңы һәйкәлдәр ҡуйыу, халыҡты йәлеп итерлек урындар буйлап маршруттар булдырыуҙы күҙаллай. Проект Мәскәү урбанистика үҙәге ҡатнашлығында төҙөлгән. Сергей Капков белдереүенсә, концепцияға ярашлы, Октябрь революцияһы урамы Иҫке Өфөнөң төп променадына әүерелһен өсөн тарихи объекттар реставрацияланасаҡ, тирә-яҡ ихаталарҙа фудкорттар, бәләкәй театр майҙансыҡтары, ижади майҙансыҡтар, асыҡ лекторийҙар һ.б. булдырыласаҡ. Яңы яр буйын үҫтереү баҫҡыстарҙы һәм ҡыя лифттарҙы йыһазландырыу, күперҙәрҙе яҡтыртыуын күҙаллай.

- Тәҡдим ителгән концепцияның барлыҡ элементтары менән дә килешмәйбеҙ, әммә уның 80 процентын үтәй алабыҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Беҙ Үҙәк менән эшләү һәм артабан алға барыу ниәтен раҫлайбыҙ. Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығы ҡаланы үҫтереүгә яңы һулыш бирергә тейеш. 43 ай эсендә беҙгә бик күп проблемаларҙы хәл итергә, киләсәккә юл ярырға тейешбеҙ. 450 йыллыҡты федераль кимәлдә үткәреү буйынса ойоштороу комитеты төҙөү тәҡдиме менән сыҡтыҡ һәм әлегә яуап көтәбеҙ.

# АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫНА ЯРҘАМ



**БР Башлығы Радий Хәбиров "Ауыл сәғәте" форматында тематик онлайн-кәңәшмә үткәрҙе. Уның барышында был юлы төбәктә баҡсасылыҡ һәм емеш-еләкселекте үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды.**

Һуңғы йылдарҙа ауыл етештереүсеһенә иғтибар бермә-бер артып китмәһә лә, ошо йүнәлештә ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә. Райондарҙа агропарктар төҙөлөүе лә быға асыҡ миҫал. Улар, нигеҙҙә, ит етештереү һәм унан ит продукттары әҙерләү менән шөғөлләнергә тейеш ине. Күҙаллауҙар буйынса, 2024 йылға тиклем республикала шундай 50 агропарк ҡулланыуға тапшырыласаҡ. Әммә тормош күрһәтеүенсә, ауыл хужалығы продукцияһы ит-һөт менән генә сикләнмәй, шуға күрә башҡа тармаҡтарҙа ла шундай агропарктар булдырыу - заман талабы. Республика Башлығы белдереүенсә, Башҡортостан Волга буйы федераль округындағы ҙур төбәктәрҙең береһе булһа ла, ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү күләме буйынса бары тик алтынсы урында тора. Шул уҡ ваҡытта гүмер-гүмергә ауыл хужалығы продукцияһы һатыу буйынса алдынғылыҡты бирмәгән төбәк сауҙа өлкәһендә ситтән килтерелгән продукцияға өҫтөнлөк бирә - был башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Шуға ла сираттағы "Ауыл сәғәте" кәңәшмәһенең ауыл хужалығы производствоһының тағы бер тармағы булған емеш-еләк үҫтереү йүнәлешендә эшләүселәре ҡатнашлығында үтеүе лә юҡҡа түгел.

Вице-премьер - БР-ҙың ауыл хужалығы министры Илшат Фәйзрахманов белдереүенсә, республикала Баҡсасылар һәм еләк-емешселәр берлеге төҙөлә башлаған һәм ул эске баҙарҙа урындағы етештереүсенең продукцияһын, йәғни Башҡортостан брендын таратыуға өҫтөнлөк бирәсәк. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров: "Беҙҙең бурыс - баҡсасыларға ярҙам итеү, улар өсөн эске баҙарҙы асыу һәм продукцияларын һатыу өсөн уңайлы шарттар, шул иҫәптән социаль учреждениеларҙа ла, булдырыу. Бынан тыш, беҙ тармаҡҡа инвестициялар менән дә ярҙам итергә тейешбеҙ", - тип белдерҙе. Кәңәшмәлә асыҡланыуынса, хужалыҡтарға артабан киңәйеү өсөн ер майҙаны кәрәк, әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында әле улар ер ала алмай.

Әлбиттә, ҙур күләмдәр менән эшләүсе етештереүселәр ниндәйҙер ярҙам ала. Шул уҡ ваҡытта, ауылдарҙа халыҡ үҙенең шәхси хужалығынан артҡан продукцияһын ҡайҙа итергә белмәй баш вата, бушлай тарата, күп осраҡта малына ашата, мөмкинлеге булғанда һатып та ебәрә. Йәйге осорҙа урмандан йыйып еләк-емеш һатып ҡына 40-100 мең һум аҡса эшләүселәр тураһында ла ишетелеп тора. Ошо ҙур һәм аныҡ продукция менән эш иткән эшҡыуарҙар ауыл халҡынан да еләк-емеш кенә түгел, башҡа продукция йыйыуҙы ла ойошторһа, яҡшы булыр ине (был осраҡта, шәхси хужаларҙан һәм хужалыҡтарҙан медицина һәм ветеринария буйынса справкалар талап ителә). Ошондай етештереүселәр менән дә хеҙмәттәшлекте көйләргә ваҡыттыр, моғайын.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә урамдарҙың йәки скверҙарҙың береһенә баҡыйлыҡҡа күскән баш ҡала мэры Өлфәт Мостафиндың исемен бирергә тәҡдим ителә. Ҡала Советы рәйесенә ҡаланың Йәмәғәт палатаһы рәйесе Айрат Шаммазовтың ҡултамғаһы менән мөрәжәғәт ебәрелгән. Быға яуап итеп баш ҡала хакимиәтенең эксперт комиссияһының киләһе ултырышында ҡала урамына йәки скверына Өлфәт Мостафиндың исемен биреү мәсьәләһе ҡараласағын хәбәр иттеләр.

✓Өфө вице-мэры Радмил Мөслимов Өфө мэры вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. "Вице-мэр Радмил Мөслимов бер ай элек уҡ Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнгәйне. Ул ошо вазифала эшләүен дауам итә", - тип белдерҙе Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте етәксеһе Марсель Байдәүләтов. Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнер алдынан Мөслимов мэрияның юлдар, яһалма ҡоролмалар төҙөү һәм ремонтлау идаралығына етәкселек итте.

✓Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә 19-28 октябрҙә үткән авария-диспетчер хеҙмәттәренең һәм ҡар таҙартыу техникаһының ҡышҡы осорға әҙерлеген тикшереү йомғаҡтары ҡаралды. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, дежур-диспетчер хеҙмәттәре ҡышҡы осорҙа эшләүгә әҙер, ҡоралмалар, персонал етерлек. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ пердприятиеларында 158 ҡар таҙартыу техникаһы бар. Һуңғы ике йылда районда 22 яңы техника һәм 35 берәмек ҡоралам алған. Ҡала райондарын төҙөкләндереү буйынса хеҙмәт, "Горзеленхоз", "СУРСИС" МБУ-ларында 417 ҡар таҙартыу техникаһы иҫәпләнә.

✓Кәңәшмәлә "Уфаводоканал" ДУПының көҙгө-ҡышҡы миҙгелгә әҙерлеге лә тикшерелде. Белдерелеүенсә, ҡала халҡын эсәр һыу менән тәьмин итеүсе ойошма үҙ объекттарын әҙерләүҙә һыуканализация селтәрҙәренең иҫкергән участкаларын алмаштырыу, селтәрҙәргә ҡуйылған ҡорамалдарҙы һәм йыйнаҙдарҙы капиталь ремонтлау, предприятиеның технологик, энергетик ҡорамалдарын һәм йылылыҡ хужалығын миҙгелгә әҙерләү йүнәлешендә алып барған. Һәм был йүнәлештәр буйынса планлаштырылған эштәр әлеге ваҡытҡа тулыһынса үтәлгән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЯҢЫ ЗАКОН

**29 октябрҙә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары республиканың ер тураһындағы законына үҙгәрештәр индерҙе. Уға ярашлы, милке сикләнгәмән ерҙәр БР Ер һәм мөлкәт министрлығы ҡарамағына тапшырыла. Был документ беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгәндән һуң йәмғиәттә ҙур резонанс тыуҙырҙы, шуға ла ул икенсе һәм өсөнсө уҡыуға парламентарийҙарҙың, халыҡтың һәм прокуратура хеҙмәткәрҙәренең фекерҙәрен иҫәпкә алып эшләнде. Һөҙөмтәлә был тәҙәтеүҙәр асыҡ электрон документ әйләнешен индерергә һәм ер участкаларын алыуҙы ябайлаштырырға, коррупцияны бөтөрөргә ярҙам итәсәк, ерҙе контролләү һөҙөмтәлелеген арттырасаҡ һәм инвестиция климатын яҡшыртасаҡ, тип билдәләнде. Закон 2021 йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә һәм 5 йыл ғына ғәмәлдә буласаҡ.**

# ЕР ТУРАҺЫНДАҒЫ ЗАКОНҒА...

## алты аңлатма

### Һүҙ ниндәй ер тураһында бара?

Һәр ер участкаһының үҙ хужаһы бар. Мәҫәлән, бар урман - Рәсәй Федерацияһыныҡы. Әгәр һеҙ ҡала ситендә йәки ауылда ер участкаһы алһағыҙ - ул тик һеҙҙең шәхси милкегеҙ һәм бер кем дә уға тейергә тейеш түгел. Шулай уҡ республика йәки аныҡ ҡала һәм район милкендәге ерҙәр ҙә бар. Шул уҡ ваҡытта "милек хоҡуғы сикләнмәгән" ерҙәр ҙә бик күп. Был нимәне аңлата? Тимәк, ер участкаһы дәүләттеке, тик ул шәхсән бер кемдеке лә түгел. Башҡортостанда былдай ерҙәр республиканың урман булмаған өләшөнөң 90 процентын алып тора. Яңы законда тик ошо ерҙәр хаҡында һүҙ бара.

### Хәҙерге ҡағыҙәләрҙең нимәһе насар?

Хәҙерге ваҡытта милек хоҡуғы булмаған ерҙәр менән хакимиәттәр идара итә. Бының ыңғай һәм кире яҡтары бар. Ыңғай яғы - урындағы власть халыҡтың ихтыяжын яҡшы белә һәм, мәҫәлән, торлаҡ йорттар төҙөлә торған йәки быуаттар дауамында көтөү йөрөгән ерҙәрҙә нефть торбаларын һалдырмаясаҡ. Кире яғы - ерҙе рәсмиләштереү ҡағыҙәләре төрлө ерҙә төрләсә. Ҡайһы бер хакимиәткә - 15, икенсеһенә 20 документ йыйырға, бер районда ҡарар ҡабул итеүҙәрен - бер ай, икенсеһендә өс ай көтөргә кәрәк. Кешеләр ҡайһы саҡта йылдар дауамында ер ала алмай.

### Яңыса нисек буласаҡ?

Яңы закон буйынса республикала ер биреүҙең берҙәм тәртибе индереләсәк. Барыһы өсөн дөйөм һәм ҡыҫҡа документтар теҙмәһе ҡабул ителәсәк. Шунан артыҡ документты бер кем талап итә алмаясаҡ. Ер бүлеү 10 көн эсендә хәл ителергә тейеш. Кешегә ҡарап ер бүлеү күренеше лә булмаясаҡ. Киҫкен мәсьәләләр мотлаҡ район хакимиәте башлығы менән бергә хәл ителәсәк. Башлыҡтарҙың ниндәйҙер ер участкаһын биреүҙе тыйыу хоҡуғы буласаҡ. Сөнки нәҡ район хакимиәте башлыҡтары кешеләрҙең проблемалары менән яҡшы һәм яҡындан таныш. Шуға күрә киҫә генә көтөү йөрөгән ерҙә ниндәйҙер фабриканың ҡалҡып сығыуы мөмкин түгел.

### Ер участкаһын алыу өсөн Өфөгә килеү мотлаҡмы?

Юҡ, ер алыу өсөн ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре буйынса идаралыҡҡа, йә күп функциялы үҙәккә, шулай уҡ "Госуслуги" порталына мөрәжәғәт итергә генә кәрәк буласаҡ. Тимәк, участка алыу өсөн ғаризаны өйҙән сыҡмайынса ғына ла бирергә мөмкин. Мәҫәлән, һеҙ республиканың икенсе районында ер алырға уйлаһығыҙ. Бар документтарығыҙҙы онлайн ебәрәһегеҙ һәм 10 көндән яуап та алаһығыҙ.

### Мәғлүмәтте ҡайҙан ҡарарға?

Хужаһыҙ ер участкалары тураһында мәғлүмәт йыйыла. Тиҙҙән ул БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығының сайтына ҡуйыласаҡ. Буш участкалар исемлеге яңыртылып торасаҡ.

### Нимәһе менән отошло?

Бюрократия булмаясаҡ. Кешеләр ғәҙел һәм аңлайышлы ҡағыҙәләр буйынса 10 көн эсендә ер бүлеме алыу мәсьәләһен хәл итә аласаҡ.

Республика буш ятҡан ерҙәрҙе әйләнешкә индереүе һөҙөмтәһендә бизнес үҫешәсәк, өҫтәмә эш урындары булдырыласаҡ, йәш ғаиләләрҙең торлаҡ мәсьәләһе хәл ителәсәк. Ерҙе һатыуҙан, ҡуртымға биреүҙән килгән аҡса ҡала, райондарҙың бюджетында ҡала. Республика был аҡсаның бер тиненә лә теймәй.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## БАЛАЛАРҒА БАҠСА КӘРӘК



**Баш ҡалала балалар баҡсалары даими төҙәлөп тороуға ҡармаҫтан, уларҙа һаман да урындар етмәй. Әлеге ваҡытта Өфөлә биш мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы төҙәлә.**

Улар Сипайлово-1а, Сипайлово-2, Яркий, Бalaново-Ново-Александровка һәм Ҡаризел йылғаһы буйлап 11-се һәм 15-се йорттар араһында урынлашасаҡ. Тәүге дүрт баҡса "Демография" милли проекты сиктәрендә "Ҡатын-ҡыҙ мәшғүллеге - өс йәшкә тиклемге балалар өсөн мәктәпкәсә белем биреү шарттары булдырыу" төбәк проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Был объекттар барыһы ла төҙәлөп бөтһә, барлығы 925 бала урын менән тәьмин ителәсәк.

Баланово-Ново-Александровка ауылындағы дөйөм майҙаны 3000 квадрат метр тәшкил иткән балалар баҡсаһы 110 урынға иҫәпләнгән. Унда алты, шулай уҡ ясле йәшендәге ике төркөм булыуы ҡаралған.

Ошо көндәрҙә Дим районындағы объект төҙәлөшө менән хакимиәт башлығы Айҙар Бәҙретдинов шәхсән танышты. Төҙәлөш эштәре көсәйтелгән, эштәр ял көндәрендә лә туҡталмай. Төп эштәр тамамланған, хәҙер бинаны биҙәү, электр ҡорамалдары ҡуйыу, мебелдәрҙе урынлаштырыу, шулай уҡ территорияны төҙөкләндереү эштәре алып барыла. Ғөмүмән алғанда, объектты декабрҙә тапшырыу ҡуҙаллана.

Барлыҡ рәсми документтар әҙер булғас, район мәғариф бүлеге электрон сират һәм балаларҙың йәшәгән урыны буйынса исемлек төҙөйәсәк. Әлеге ваҡытта хеҙмәткәрҙәр штаты булдырыла. Барлыҡ ҡыҙыҡһындырған һорауҙар менән 8 (347) 281-16-44 телефонына шылтыратып, тулы яуап алырға мөмкин.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ЭШ ЮҠМЫ,

## әллә эшләргә теләүселәр юҡмы?



**Был тажлы зәхмәт ил иҡтисадына һиҙелерлек аяҡ салды, тулыһынса булмаһа ла, ҡайһы бер ойошма-предприятиелар эшен туҡтатып, эшселәрен ҡыҫҡартты.**

Уҙған йылдың сентябре менән сағыштырғанда, Башҡортостанда рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр һаны ете тапҡырға артып, 129 меңгә еткән, тип хәбәр итте республика статистиктары. Сентябрь аҙағына республиканың мәшғүллек хеҙмәтендә бөтәһе 135,5 мең эшһеҙ иҫәптә торған. Теркәлгән эшһеҙлек кимәле эшсе көстәр һанына 6,79 процент тәшкил иткән. Быйыл сентябрь айында ғына Башҡортостанда 15 менләгән кеше эшһеҙ статусын алған. Шул уҡ ваҡытта 8 мендән ашыу эшһеҙ эш йәки килемле шөғөл тапҡан. Сағыштырыу өсөн: 2020 йылдың ғинуарында 20,4 мең кеше мәшғүллек хеҙмәтендә иҫәптә торған, уларҙың 18,3 меңе эшһеҙ статусына эйә булған.

Республикала шул сама эшһеҙҙәр бар, әммә ошо көндәрҙә мәғлүм булыуынса, Башҡортостан менән Үзбәкстан, атап әйткәндә Сәмәрҡәнд өлкәһе хакимиәте хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуя һәм уға ярашлы, Сәмәрҡәнд өлкәһе халыҡҡа Башҡортостанда эшкә урынлашыу мөмкинлеге тураһында мәғлүмәт таратасаҡ, Башҡортостан предприятиелары өсөн кадрҙар һайлап аласаҡ, уларҙы уҡытасаҡ һәм эшкә ебәрәсәк. Атап әйткәндә, әлегә тегеү производстволары хаҡында һүҙ бара. Тәүге заказсы булып Учалының ҙур тегеү компанияһы сығыш яһай. Әйтеүҙәренсә, ул бына бер нисә ай инде тегенселәр таба алмай икән. Үзбәкстандан килгән ҡыҙҙарға айына 30 мең һум эш хаҡы һәм тулы социаль пакет тәҡдим итәләр. Шуныһы иғтибарға лайыҡ - урындағы халыҡ араһында был суммаға эшләргә риза булыусы юҡ.

Уйлап ҡараһаң, бөгөн Башҡортостан ирҙәре генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙары ла Себерҙә вахта ысулы менән эшләй, ҡайһы берәүҙәр хатта сит илдәрҙә эшләргә лә риза. Ғаиләһенән, балаларынан айырылып әллә ҡайҙа йәһәннәмдә йөрөгән ҡатын-ҡыҙ өсөн Башҡортостанда ла вахта менән эшләүҙе ойоштороу мөмкин түгелме ни? Ниңә район хакимиәттәре башлыҡтары һәр райондан тегенселәрҙе, Учалыла вахта ысулы менән эшләргә риза граждандарҙы йыйып, уларҙы алып барыу, алып ҡайтыу мәсьәләһен хәл итмәҫкә? Былдай шарттарҙа үҙ районында, ауылында эшһеҙ ятҡан ҡатын-ҡыҙҙар юл хаҡын түләргә лә, ваҡытлыса сит районда йәшәп торорға ла риза булыр ине, моғайын. Ғаиләләре лә уларҙың әллә ҡайҙа түгел, ә Башҡортостанда, халыҡса әйткәндә, баҡса артында ғына эшләүенә күнер ине. Икенсенән, тегенселәрҙең күп булмауы ла мөмкин, әммә Үзбәкстан беҙгә эшкә ебәрәсәк ҡыҙҙарын уҡытырға, эшкә өйрәтергә риза, ә Башҡортостан быны эшләй алмаймы ни? Һорауҙар күп, әммә берәү ҙә аныҡ ҡына яуапты белмәй.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк астмаһы

❖ Йөрәк астмаһы сиренән 1/2 балғалаҡ үгәй инә үләненең ваҡланған сәскәләренә 250 мл ҡайнар һыу ҡойоп, сәй кеүек бешерергә, урап ҡуйырға була. Килеп сыҡҡан төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда эсергә. Һәр эскән һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Йөрәк астмаһы өйәнәге тотҡанда аяҡты эҫе һыуға тығып ултырыу һәм ҡулдарға, аяҡҡа йылытҡыс һалыу ярҙам итә. Шулай уҡ ҡаты сәй, ҡәһүә, иҫерткес эсемлектәр эсеүҙән, тәмәкенән баш тартырға кәрәк.

### Гастрит

❖ Ашҡаҙан һутының юғары кислоталылығына бәйле гастрит сире булғанда картуф һуты эсергә кәңәш ителә. 2-3 картуфты ҡабығынан әрсеп ваҡ ҡырғыстан тиҙ генә үткәрергә, 4 ҡат марля аша һығырға. 100 мл һут килеп сығырға тейеш. Был һутты иртәнге, төшкө һәм киске аш мәлендә ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланған осорҙа әсе, ҡаҡланған, тоҙло бер нәмә лә ашарға ярамай. Был рәүешле йылына 2 тапҡыр 2-шәр аҙна дауаланырға.

### Йөрәк өйәнәге

❖ Йөрәк өйәнәгенән (стенокардия) 1 балғалаҡ ярут үләне орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта 5 минут ҡайнатҡас, 2 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашау менән ҡарамайса көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Хәл яҡшырғансы дауаланыуҙы дауам итергә. Әйтергә кәрәк, ярут үләне (ярутка полевая) ашҡаҙандың кислоталылығын түбәнәйтә, ҡуйы һәм лайлалы ҡаҡырыҡты шыйыҡлата, бөйәл һәм тир сығыуын арттыра, күремде тиҙләтә һәм күбәйтә. Үҫемлек шулай уҡ яраларҙы уңалтыу, микробтарға һәм зәңгә ауырыуына ҡаршы сифаттарға эйә.

### Паркинсон ауырыуы

❖ Паркинсон ауырыуын дауалау өсөн халыҡ медицинаһында баҡса кәбеҫтәһе орлоғон ҡулланыу кәңәш ителә. Дауаны әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ кәбеҫтә орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр 1 сирек стакан эсергә (стакандың 1/4 өлөшө).

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Һуңғы осорҙа бөтөнләй аңлашылмаған интернет-алдашыуҙың бер төрө барлыҡҡа килде. Яуыз ниәтлеләр уйында аҡса эшләү түгел, ә кеше талаштырыу теләге. Кемдер ошоға оҡшаш хәлгә тарыһа, һығымта яһарға ашыҡмаһын ине.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Мозаика алымында арҡырыһына, буйына һәм ҡыяһына йөйҙәрҙе тигеҙ итеп тегеү өсөн күҙ үлсәме менән дөрөҫ ҡырҡа һәм ипләп тегеү оҫталығы кәрәк булған. Билдәле бер төҫтәр ритмы ла тотолған. Башҡорт ауылдарында осраған күпселек әйберҙәр тел тейҙергеһеҙ оҫта тегелгән.

Ғөмүмән, XX быуаттың мозаика әйберҙәре сағыулығы менән айырылып торған. Күп төҫлө эске майҙансыҡтың сите бер төҫтәге туҡыманан тегелеүе тигеҙлекте һаҡлаған. Ҡаймаға ҡара, ҡара күк, ҡара ҡыҙыл, ҡуйы ҡыҙыл, йәшел туҡымалар тотонолған. Боронғо әйберҙәр төҫ йәһәтенән бик сағыу булмаған.



*Ултырғыс һәм урындыҡ түшәмдәре (көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондар).*

Биҙәк төҫтәрен тегенсе үҙ белдеге менән һайлаған. Шулай ҙа төҫтәрҙе тап килтергәндә ниндәйҙер уртаҡлыҡтар табырға була.

Күп кенә мозаика биҙәктәрҙә ҡыҙыл төҫ ҡулланыла. Ул бик күп төҫтәр менән аралаштырыла - сағыу (күк, йәшел, шәмәхә, гәрсис төҫө) йәки шыйыҡлатылған нәфис (алһыу, сирень, зәңгәр). Ҡыҙылды ҡара менән аралаштырыу традицион булған. Ҡуйы ҡыҙыл төҫ бик һирәк комбинацияларҙа ҡулланылған, үҙенә яҡын гаммала йыш осрай (Сағыу ҡыҙыл, алһыу), ә бына йәшел, һары, һоро, ҡара, күк менән бик һирәк ҡоралған.

Киң ҡулланылышы буйынса ҡыҙылдан һуң йәшел төҫ килә. Һыҙаттарҙа һәм оя биҙәктәрҙә (сәскәгә оҡшаш биҙәк) ул ҡыҙыл, күк һәм бигерәк ҡара - һоро, шәмәхә, сейә көрән, ҡара күк, ҡара төҫтәр эргәһендә килә. Асыҡ йәшел төҫ зәңгәр йәки алһыуға ҡушылыуы ихтимал. Йәшел-һары оя биҙәктәр бик һирәк осрай.

Күк төҫ орнаменттарҙа тик һуңғы осорҙарҙа ғына ҡулланыла башлаған кеүек тойола. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡорамала был төҫтәге ҙур булмаған туҡыма киҫәктәре һәр ваҡыт матур күренә. Ул ҡыҙыл, ҡара төҫтәге туҡыма эргәһенә ҡуйылырға мөмкин; шулай ҙа ғәҙәттә йәшел, һары, ҡыҙғылт һары, гәрсис төҫөндәге, һоро һәм сейә ҡыҙыл менән берләштерелә. Һуңғы осорға ҡараған әйберҙәрҙә күк төҫкә орнамент киҫәктәрендә йәки ҡаймаһында зәңгәр, ҡара күк, шәмәхә ҡорамалар өҫтәлә.

Һарының ике төрлөһө йыш ҡулланыла: асыҡ һары (лимон төҫө) һәм гәрсис төҫө. Дөйөм алғанда был төҫ мозаикала киң ҡулланылмай, ҡыҙғылт һарыға өҫтөнлөк бирелгән. Һары һәм ҡыҙғылт һары ҡорамалар күк, зәңгәр, ҡыҙыл, шәмәхәләре менән берләшә. Ҡайһы бер осраҡта күп төҫлө панорамала һары-ҡара шаҡмаҡ һәм ҡыя шаҡмаҡтар төп урын биләп тора.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# ҺӘТЕСТӘ, ҺӘТЕСТӘ...



**"Һәтестә, һәтестә, ҡыҙҙар эстә беҙ тышта" тигән йыр һүҙҙәрен күптәребеҙ (бигерәк тә, өлкән быуын) ишеткәне барҙыр. Ә нимәне аңлата һуң ул "һәтестә" тигән һүҙ? Баҡтиһәң, йырға был һүҙҙәр буштан ғына килеп инмәгән, һәм улар йыр тексында бик тә урынлы ҡулланыла булып сыҡты.**

Был һүҙҙең мәғәнәһе фарсы теленән (йәки, киңерәк алғанда, иран донъяһынан) табылды Уларҙың телендә "һәтестә" һүҙе "һаҡ булығыҙ, ипләңкерәп" тип иҫкәртеүҙе аңлата икән. Ысынлап та, баяғы йыр һүҙҙәренә ҡарағанда, ҡыҙҙар һәм егеттәрҙең аулаҡ өйгә йыйылып, уйын-көлкө ҡороп шаярышыуын аңларға була. Йәғни, ҡыҙҙар эстә, ишек бикләп егеттәрҙе индермәйҙәр. Ә егеттәр иһә, бер-береһен һаҡ, шым ғына булырға иҫкәртеп, ҡыҙҙар ултырған өй янына йәшерен генә килеп, улар аңғармағанда ғына өйгә инергә уйлайҙар. Ошо уй-ниәттәрен бойомға ашырырға теләп улар бер-береһен "һәтестә", "һәтестә", йәғни "ипләңкерәп, һағыраҡ булығыҙ", тип иҫкәртә-иҫкәртә ҡыҙҙар ултырған өй янында уралалар. Хәҙер был һүҙ һөйләшеүҙә ҡулланыуҙан төшөп ҡалып, тик йыр тексында ғына һаҡланған. Йыры ла радио тапшырыуҙарында унда-бында ғына ишетелеп ҡалыуға ҡарағанда, онотолоуға табан бара кеүек. Һәр һүҙҙең халыҡтың телендә барлыҡҡа килеү, төшөп ҡалып юғалыу этабы була. "Һәтестә" һүҙе был ҡанунға миҫалдыр. Ҡасандыр, халҡыбыҙ көнсығыш илдәре менән тығыҙ бәйләнештә булып, шул донъяның айырылмаҫ бер өлөшө булған. Башҡорт Урта Азияла, Яҡын Көнсығышта йәшәгән төрлө төрки, иран телдәрендә һөйләшкән халыҡтар менән алыш-биреш итеп, ҡайһы саҡтарҙа бер-береһенә яу сабып та донъя көткән.

Мин үҙем күптән инде башҡорт мифологияһын тергеҙергә, аңларға тырышып, икенсе халыҡтарҙың мифологияһына, теленә, тарихына мөрәжәғәт итергә мәжбүрмен. Сөнки мифты аңлар өсөн һәр ваҡыт телгә иғтибар итергә кәрәк. Донъяға билдәле этнографтар, фольклорсылар "Ғалим кеше үҙе тикшергән, өйрәнгән халыҡты теүәл һәм дөрөҫ аңлар өсөн иң тәүҙә шул халыҡтың телен яҡшы белергә тейеш", тип бик дөрөҫ әйтә. Ә беҙҙә башҡорттоң рухи донъяһын өйрәнеүсе ҡайһы бер ғалимдар башҡорт телен бөтөнләй белмәй. Шунан уларҙан ниндәй дөрөҫ фекер, теүәллек көтәһең инде.

Бына "һәтестә" һүҙе лә, әгәр иғтибар итеп, уйлап ҡараһаң, башҡорттоң боронғо йолаһын аңларға ярҙам итә. Башҡорт йәштәре элегерәк кәләш алыр алдынан аулаҡ өйҙә осрашып, уйын-көлкө ҡороп, бер-береһе менән танышып, үҙҙәренә донъя көтөрлөк йәр һайлаған. Ошо уйындарҙың сағылышы булып йырыбыҙҙа "һәтестә" һүҙе тороп ҡалған. Хәҙер ул боронғо йолалар ҙа, уға бәйле телдәге әлеге һүҙ ҙә онотолоп бара һәм шуныһы моңһоу үкенес тыуҙыра.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

*ИҪКӘРТӘБЕҘ*

# ИНТЕРНЕТ ДУҪМЫ, ДОШМАНМЫ?

**Интернет беҙҙең илгә 2000 йылдар тирәһендә ныҡлап инә башланы. 20 йыл самаһы элек ул нәмәне эре предприятиелар ғына эш өсөн ҡуллана ине. Әүәле донъя селтәре һаналған интернетҡа компьютерҙар ярҙамында ғына инеп була торғайны, компьютерҙар ҙа һәр бер ғаиләгә тәтемәне. Бөгөн иһә заманалар ныҡ үҙгәрҙе, хәҙер был технологияны һәр бала тиерлек кеҫәһендә йөрөтә.**



Төймәле мобиль телефондар урынына килгән смартфон ярҙамында һәр кем интернет менән файҙаланыу мөмкинлеге алды. Смартфонды хәҙер ике-өс йәшлек балаларҙан алып әбей-бабайҙарға тиклем ҡуллана. Һүҙ юҡ, бик уңайлы, кәрәкле аппарат ул смартфон тигәндәре: өйҙә ултырып ҡына газ, электр уты өсөн һәм башҡа түләүҙәрҙе түләйһең. Тиҫтә йылдар күрешә алмаған класташтар, курсташтарҙы табып аралашаһың. Бынауы эпидемия мәлендә лә уҡыусы балалар тик интернет ярҙамында өйҙә генә ултырып, дистанцион уҡый алды. Электрон почта аша алыҫ араларҙы үтмәйенсә генә документтар ебәрергә, дауаханаға йәки башҡа хөкүмәт органдарына сиратҡа яҙылырға, ниндәйҙер рәсми ҡағыҙҙар юлларға мөмкин, әңгәмәсең менән тауыш аша ғына түгел, смартфон экранында бер-береңә ҡарап һөйләшеп була һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Һис шикһеҙ, интернеттың файҙаһы баһалап бөткөһөҙ. Шулай ҙа... Шулай уҡ тотош файҙа ғына микән интернет тигәндәре? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы берәүҙәр уны яуыз ниәт менән дә ҡуллана. Иң күп зыян, бәлки, аҡса менән мутлашыусыларҙан килә. Компьютер, интернет, программалау серҙәрен яҡшы төшөнгән бурҙар бер ҡатлы ябай кешеләрҙең интернет-аккаунттарын "емереп" инеп, улар исеменән бөтә таныштарына бәләгә тарыуы, шул арҡала ашығыс рәүештә аҡса талап итерелеүе тураһында алдыҡ хәбәрҙәр ебәрә. Кемдәрҙер ышана һәм танышы, туғаны йәки балаһы исеменән килгән интернет-хәбәрҙә күрһәтелгән банк картаһына аҡса күсереп тә ҡуя. Бындай тоҙаҡҡа бигерәк тә ата-әсәләр эләгәләр. Кем генә бәләгә тарыған үҙ балаһына ярҙам ебәрмәһен инде.

Һуңғы осорҙа бөтөнләй аңлашылмаған интернет-алдашыуҙың тағы бер төрө барлыҡҡа килде. Яуыз ниәтлеләр уйында аҡса эшләү түгел, ә кеше талаштырыу теләге. Кемдер ошоға оҡшаш хәлгә тарыһа, һығымта яһарға ашыҡмаһын ине. Был схема ниңәлер мәктәп уҡыусылары араһында таралған. Яуыз уйлы әҙәмдәр ниндәй булһа ла кешенең интернетта, мәҫәлән, "Бәйләнештә" ("В контакте") тигән сайттағы аккаунтының 100 процентҡа оҡшаш копияһын эшләй, шул уҡ фамилия, шул уҡ исем, шул уҡ фотолар урынлаштыра. Һәм копия-аккаунт исеменән ысын хужаның таныштарына йәки бөтөнләй таныш булмаған кешеләргә иң әшәке һүҙҙәр менән әрләү, рәнйетеү һүҙҙәре яҙа, ниндәйҙер фотолар ебәрә. Рәнйеүле хәбәр алған кеше танышының бындай ҡылығына, әлбиттә, аптырай, ул да насар һүҙҙәр менән ҡаршы яуап бирә йәки уны "ҡара исемлек"кә индерә (күп сайттарҙа-сервистарҙа "ҡара исемлек" функцияһы бар. Аралашҡың килмәгән кешене "ҡара исемлек"кә өҫтәһәң, ул һинең интернет-аккаунтыңды ҡарай алмай, хәбәр ҙә яҙа алмай). Ләкин яуыздарҙы был ғына туҡтата алмай, һиңә хәбәр яҙа алмаһа, ул "ҡорбанының" туғандарына тағы ла шул үҙе яһаған копия-аккаунт исеменән хәбәр ебәрә. Имеш тә, һеҙҙең туғанығыҙ миңә әшәке һүҙҙәр яҙа, шулайта-былайта...

Яуыздарҙың логикаһы, ысынлап та, аңлайышһыҙ. Улар уҡыусы балаларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйып, ниндәй маҡсатҡа ирешергә теләй? Бәлки, кемдер шаяртып ҡына үҙенең программист-хакерлыҡ һәләттәрен һынап ҡарарға теләгәндер. Ләкин уйындан уймаҡ сыға, тигәнде иҫтән сығармайыҡ. Кеше һүҙе кеше үлтерә, тиҙәр, шаяртыу бик ҡимmәткә төшөүе ихтимал, Аллам һаҡлаһын!

Шуның өсөн ата-әсәләргә мөрәжәғәт иткем килә: балаларынан һорашһындар, бәлки, уларға ла шундай хәбәрҙәр килгәндер һәм аптырап, эстән генә уйланып-көйәләнеп йөрөйҙәрҙер. Был хәбәрҙәр сираттағы интернет-алдаҡ икәнен аңлатһындар.

**Азат КӨМӨШБАЕВ.**
**Әбйәлил районы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

10

Ғаиләм-ҡәлғәм

7-13 ноябрь (ҡырпағай)

2020 йыл

№45 (931)

ӘСЕ ХӘҠИҠӘТ

# БАШҠОРТ БАЙЫҺА...

## бисә аламы?

**Шундай әйтем йәшәй халыҡта. Тулы варианты ошолай: "Урыҫ байыһа, өй һала, башҡорт байыһа, бисә ала". Был әйтем әлеге заманға әллә ни тура ла килмәҫ, әммә ундағы фәлсәфә һәм шул фәлсәфәгә ярашлы ир-ат психологияһы йәшәй әле. Күтәрелгән, уңышҡа өлгәшкән, байыған, билдәлелек яулаған ирҙәрҙең ҡатын алмаштырыу, ҡатын яңыртыу йолаһы йәшәй. Ошо мәсьәләне тикшереп ҡарайыҡ әле.**



Ниндәй ул уңышлы ир? Уңышлы була торған ир - ул бала саҡтан, тимәк, йәштән көслө характерлы, тырыш, талапсан, маҡсатына ҡарай яҙлыҡмай бара белә торған кеше. Ул йомшаҡ, бәләсел, характерһыҙ, ҡурҡаҡ була алмай. Уңышҡа өлгәшәсәк ир юлындағыларҙы артыҡ аяп тормаҫ, үтә йомартланмаҫ та, уғата һаран да булмаҫ. Был сифаттары унан ана шул күпкә өлгәшер шәхес яһай ҙа инде.

Бизнеста, спортта, шәхси эшҡыуарлыҡта йәки сәнғәт, сәйәсәт һәм башҡа өлкәләрҙә яҡшы үҫешеп китә алған, байыған, дәрәжә яулаған, дан алған ирҙәргә был уңыштар буштан ғына килмәй. Улар ошоларға эйә булыу өсөн нимәләрҙәндер үҙҙәрен мәхрүм итеп, ниндәйҙер сикләүҙәргә түҙеп, системалы эш алып барыуға, хатта тәүлек әйләнәһенә хеҙмәт итеүгә дусар булып йәшәй. Уңышлы ирҙәр - улар ысынында егәрле, идеялы, энергиялы кешеләр.

Уңышҡа бер көндә генә өлгәшмәйҙәр, шулай бит? Уңыш артында тиҫтәләгән йылдарҙы үҙ эсенә алған тотош ғүмер ята. Ғәҙәттә, үҙ көсө менән байыған, дан алған ирҙәр, капиталының килем килтерә башлаған һәм аҙыраҡ тын алып, уңлы-һуллы ҡарай ала башлаған мәлендә инде 45-50 йәштәрҙәге ир уҙамандарына әйләнгән була. Һәм, әлбиттә, уларҙың йәштән өйләнгән, студент саҡтарында йәрәшкән, мөхәббәт менән ҡауышҡан ҡатындары бар. Уңышлы буласаҡ ирҙәр йәшләй өйләнә. Был уларҙың альфа самец булыуҙарын, иртә өлгөрөүҙәрен, ҡатын-ҡыҙҙы яулай белеүҙәрен һәм тоҡом ҡалдырырға тырышыуҙарын күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта уңышлы ирҙәр артында аҡыллы ҡатындар тороуын да онотторға ярамай. Көнө-төнө аҡса табам, мал үрсетәм тип сапҡан иргә рухи көс биреп, уның теләктәрен ҡәнәғәтләндереп, күңелен үҫтереп, ҡайһылары хатта ҡуша йөрөп утты-һыуҙы бергә кисеп тә, ғаилә усағын дөрләтеп тота улар. Өйөндә, ғаиләһендә тыныслыҡ, йылы ҡараш, матур мөғәмәлә булғанда ғына ирҙәрҙә хеҙмәткә һәм башҡа нәмәгә дәрт уяна, илһам урғый, көсө була. Тимәк, уңышлы ирҙәрҙең үҫеү һәм тамыр нығытыу тупрағы - ул яҡшы ҡатын. Һәм улар был яҡшы ҡатынды үҙҙәре ҡарап, һайлап алған. Уңышҡа өлгәшәсәк ир-егеттәрҙә ҡатын-ҡыҙға ҡарата талап та юғары. Улар буласаҡ ҡатынын матурҙан, егәрленән, аҡыллынан һайларға ынтыла. Был уларҙың аңына шулай һалынған. Үҙҙәре альфа булғас, шундай уҡ көслө, сәләмәт, энергетикаһы тура килгән һәм үҙе һоҡланған ҡыҙҙы ғына тиң күрә ундайҙар.

Тау үренә үрләгән ирҙең йәшәйеше тынғыһыҙ һәм ул ауырлыҡты ғаиләһенә лә төшөрмәй тормай. Уның кәйефһеҙ, асыулы, арыған, көйгән сағы күберәк. Һәм таяҡтың ауыр башы ҡатынына төшә. Ире яғынан килгән бөтөн негативты ҡабул итеп торған, үҙенә һеңдергән һәм кире ҡаға алмаған ҡатын физик һәм рухи яҡтан тиҙ туҙа, шәхес булараҡ ҡаҡшай башлай. Ире эскесе түгел, эштәре яҡшы бара, барын табып тора, ҡатынын кейендерә, шәп йортта йәшәтә, ялтыр машинала йөрөтә икән, ни эшләп ул ҡатын иренә зарланһын инде? Эске ҡыйралышын, баҫымдан, кәмһетеүҙәрҙән миктәгәнен тойһа ла, ул быларҙы тышҡа сығармаясаҡ. Ғәҙәттә, йүнһеҙ ирҙәрҙең ҡатындары зарлана, ирҙәрен яманлап, күңелдәрен бушатып ала. Ә уңышлы ир ҡатындары тешен ҡыҫып, китмәй, айырылмай, шул күнегелгән, туҡтауһыҙ әйләнгән бер үҙәк булып йәшәүен дауам итә. Һәм бер ваҡыт килеп шул үҙәк арый. Ул инде ирен илһамландыра, дәртләндерә алмай башлай. Шул ваҡыт ир ҙә ҡатынына иғтибар итә. Һәм ҡасандыр уны һоҡландырған сибәр, уңған ҡыҙ урынына арыуыҡ олоғайған, йонсоған, бәлки, һимергән йәки ауырыуға һабышҡан ханымды күрә. Уңыш юлында көрәшкән ирҙең ҡатыны бер нисек тә гөл һымаҡ ҡына булып ҡала алмай. Ул бит шул уңыштың эске яғын, башҡаларға күренмәгән мораль көрәшен үҙе аша үткәргән йән. Иренең уңыштары ҡатынының рухи, эмоциональ һәм ҡатын-ҡыҙҙа ғына була торған энергетикаһы аша килгән. Ул үҙен иренең уңышына ҡорбан иткән, тиергә лә була.

Шулай итеп, ире урта йәштәргә етеп, уңыштың түбәһенә менеп еткәндә (етеп барғанда), ҡатын үҙ функцияһын үтәй алмай башлай һәм шул энергетикаға мохтаж булған һөйгәне был ролгә икенсе фигураны күҙләргә мәжбүр була. Һәм, күп тә уйлап тормай, ул ҡатынын йәшерәк йәргә алмаштырып та ҡуя. Был аҙымды яһау, әлбиттә, ниндәйҙер хистәр, конфликт һәм башҡа артыҡ күңелле булмаған күренештәр аша башҡарыла. Шулай ҙа, күп осраҡта, ул аҙым яһала - ир ҡатынын йәшерәккә, матурыраҡҡа, ҡараулыраҡҡа, сәләмәтерәккә алмаштыра. 45-50 йәштәрҙә ир-егет тулыһынса үҙаллылыҡ алған, уның артында ниндәйҙер капитал бар һәм был матдилыҡ уға һис шикһеҙ ныҡлы ышаныс, һауалылыҡ һәм хатта тәкәбберлек бирә. Барыһын да үҙе хәл итеп өйрәнгән ир был мәсьәләне лә эш алымы кеүек кенә итеп башҡарып ҡуя. Ябай ҡарашҡа был ирҙең байып, уңышҡа өлгәшеп, шашып, ҡатын йәшәртеүе булып күренһә лә, асылда, был яулаусы, еңеүсе, буйһондороусы ир-егеттең энергетика сығанағын алмаштырыуы ғына ул. Вампир кеүек, бер йәндең көсөн, илһамын һурып алып бөтөп, уның урынына яңыһын булдырыуы. Нисек кенә ҡырағай һәм вәхшилек булып күренмәһен, был көслө характерлы ирҙәрҙең тәбиғәте.

Әлбиттә, иллегә еткәндә барыһы ла ҡартая, туҙа һәм башҡалар, әммә уңышлы ир ҡатындары елкәһе күберәкте күтәрә икән. Унан һуң, тағы берәү ҙә тота килеп ҡатынын, ҡартайған, тип ташлап ҡуймай. Күптәр ҡуша тиң ҡартайып йәшәй бирә. Ә уңышлы ирҙәрҙең етмеш проценты, үҙҙәренең тәбиғәттән һалынған альфалыҡ холоҡтарына барып, рухи һәм физик яҡтан ҡәнәғәтләндерә алмай башлаған, энергияһы кәмегән ҡатынды янында тотҡолары килмәй. Бының өсөн уларҙа алда әйтелгән ҡатылыҡ та, талапсанлыҡ та, ниндәйҙер кимәлдә ҡанһыҙлыҡ та етерлек.

Шулай итеп, уңышлы ир ҡатынына үҙен ҡарап, аяп йәшәүҙән алда энергияһын самалап тотона белеп, йәшлеген, матурлығын һаҡларға тырышырға кәңәш бирер. Иренән бер аҙым алда барып, киләсәкте күҙаллап торорға ҡушыр. Һәм, иң беренсе сиратта, үҙенең ирҙең ундырышлы тупрағы ғына түгел, ә ҡатын-ҡыҙ ҙа икәнен онотмаҫҡа, энергияны, көстө ҡатын-ҡыҙға хас булған инештәрҙән ала белергә кәңәш итер. Хатта ире кәңәш итмәгәндә лә уңышлы ирҙең ҡатыны быларҙы белергә тейеш.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

ҮӘТ ӘЙ!

# ЕТЕ ЯТТАН ҺАҠЛАН



**Төрлө милләтле ата-әсәнән тыуған бала һәләтле була, тигән ҡараш йәшәй. Ә бына фән, ғалимдар бының киреһен иҫбатлай.**

И. М. Сеченов исемендәге Мәскәү медицина академияһының педиатрия кафедраһы мөдире, медицина фәндәре докторы О. К. Ботвиньев, немец ғалимы Эгон фон Эйкштедт, яҙыусы В. Б. Авдеев, Франция антропологы Поль Топинарҙың фәнни тикшеренеүҙәре буйынса ике ят ҡанлы ата-әсәнең һөйөү емеше интеллекты сағыштырмаса юғары. Әммә был күренеш тәүге быуында ғына сағылыш таба. Артабан баланың балаһы - түбән "сифатлы", йәғни аҡыл кимәле быуындан-быуынға һайыға бара, шулай уҡ диабет, эпилепсия, яман шеш, зәғифлек йыш осрай.

Поль Топинарҙың "Антропология" (1979) тип аталған монографияһында шундай юлдар бар: "Грузиянан Египетҡа килтерелгән ҡатындар менән йәрәшкән мәмлүктәрҙең балалары түлһеҙлектән, аҡыл зәғифлегенән, ҡаты ауырыуҙарҙан тулыһынса юҡҡа сыҡҡан".

Ғалимдар билдәләүенсә, Ява утрауына күсеп килгән Малайзия менән Голландия вәкилдәренең өйләнешеү һөҙөмтәһе лә һөйөндөрмәй: тыуым бөтөнләй юҡ!

АҠШ-та негр менән аҡ тәнлеләр никахы ла аяныслы икән: байтаҡ ҡына ғаилә бала һөйөү шатлығынан мәхрүм, йә сабый ниндәйҙер сиргә дусар, ике ят ҡан ҡушылғандан тыуғандар, ғәҙәттә, ауыр холоҡло, араларында енәйәтсе, психик сирлеләр күп.

Ҡан таҙалығы яғынан япондарға, йәһүдтәргә еткән милләт юҡ. Уларҙың кәтғи ҡануны: һәр кем үҙ милләте менән генә ғаилә ҡорорға тейеш!

✓ *Ғаиләле булып йәшәү, бала тәрбиәләү - тауға менеү кеүек. Бер бейеклекте менһәң, уның артынан икенсе артылыш булыуы асыҡлана. Беҙҙең ғаилә тарихы ла бер һуҡмаҡтан баш алғайны.*



БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ

**"Татыу ғаилә - ил күрке" тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Был тапҡыр һүҙҙәр Мәләүез районы Бәләкәй Шәрип ауылында йәшәгән Айгөл һәм Сәлих Байгилдиндарға ҡарап әйтелгән, тиерһең. Йәшәү рәүештәре, ғаилә традициялары менән, ысынлап та, улар тораҡ пунктҡа йәм, ҡот өҫтәй: ҡорған йылы ояларында татлы һөйөү емеше булып тыуған биш балаһы бер-береһенең үксәһенә баҫып үҫеп килә. Матур итеп яңы йорт һалып ингәндәр. Һарай тултырып мал тоталар, баҡса үҫтерәләр. Шул уҡ ваҡытта фермерлыҡ эшмәкәрлеген дә уңышлы алып баралар. Йәшлек таңында ҡабынған һөйөү хистәрен һүрелтмәй, замандаштарына матур өлгө күрһәтәләр. Бер-береһенә исем менән түгел, ә "йәнем" тип кенә өндәшеүҙәренә ауылда бер кем дә ғәжәпләнмәй. Үҙ-ара ихлас мөнәсәбәттәрен уларҙың йылы күҙ ҡарашынан да танырға, белергә мөмкин.**

# БӘХЕТЛЕЛӘРГӘ...

## ел дә ыңғай иҫә



### Уттай ҡыҙҙы уттан ҡурҡмағандар ала...

Йәшлек хистәрен һаҡлап, мөхәббәттәренең ныҡлығын һынап ғаилә ҡорған ваҡытта Айгөлгә - 21, Сәлихҡа 25 йәш тулған була. "Айгөлдөң артынан биш йыл йөрөнөм дә ҡуйҙым", - тип шаярта ғаилә башлығы. Әммә уйынлы-ысынлы әйтелгән был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ та бар. Бер-береһен үҫмер генә осорҙа район һабантуйында осрата улар. Көләс йөҙлө, баҫҡан ерендә бейеп торған Айгөлдө тәү күреүҙә үк оҡшата егет. "Уттай ҡыҙҙы уттан ҡурҡмағандар ғына ала" тиҙәр. Хәйер, егет тә төшөп ҡалғандарҙан түгел, дөрөҫөргә, үҙ-үҙенә ышанған, маҡсатҡа ынтылышлы, ҡыйыу булып сыға. Тап ошо сифаттары уны ниәттәренә өлгәшергә ярҙам итә лә инде.

- Уйҙар, әйткән һүҙҙәр матдиләшә, бойомға аша, тигәндәре бик тә дөрөҫ, - тип дауам итә Сәлих. - Быны мин үҙ тормошомда бер нисә тапҡыр һынаным. Шуның береһен генә әйтеп үтәм: бала саҡта ололар шаяртып һораһа, гел "Кәләште Ҡаманан алам", тип йөрөгәнмен. Күрше Ҡотлобулат ауылын халыҡ шулай тип йөрөтә. Мин өйләнгәндә ҡала ҡыҙы иҫәпләнһә лә, Айгөл сығышы менән Ҡаманыҡы, шунда тыуған, тәпәй баҫҡан. Аҙаҡ яҙмыш елдәре уны Мәләүез ҡалаһына алып киткән булып сыҡты...

Йәмәғәте һөйләгәндә Айгөл һүҙ ҡыҫтырмай, әле бер, әле икенсе балаһының янына килеп, дәресен ҡараша, бер туҡтауһыҙ һорау биргән кинйәләре Ирхандың һорауҙарына сабыр ғына яуап бирергә лә өлгөрә. Үрҙә әйтеп китеүебеҙсә, Байгилдиндарҙың татыу ғаиләһендә биш бала үҫә. Тәүге дуртәүһе - Динис Бүләков исемендәге Смаҡ урта мәктәбе уҡыусылары. Балаларының барыһына ла, тормош юлдары яҡты, ҡотло, оҙон ғүмерле булһын, тип, матур исемдәр һайлап ҡушҡандар. Баш балалары Зөлхизәгә - 12 йәш. Олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, белем биреү учреждениеһының йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашып, былтыр ул мәктәптең Динис Бүләков исемендәге премияһына лайыҡ булған. 11 йәшлек Наҙгөлдө шиғыр һөйләү конкурстарында йыш осратырға мөмкин. Гагарин кубогына олимпиадаларҙағы уңышы үткән уҡыу йылында махсус значок менән билдәләнгән. 3-сө класта уҡыған Асия һүрәт төшөрөүгә әүәҫ. Ҙур-ҙур күләмле әҫәрҙәрҙе илай-илай ятлаһа ла, апайҙарына оҡшап, көлә-көлә, йырлай-йырлай оҫта һөйләүе менән иғтибарҙы йәлеп итә. Малик быйыл 1-се класҡа барған. Яңы ғына уҡый башлаһа ла, дәрестән ҡайтып, бер аҙ ял итеп алғас та, өйгә бирелгән эште башҡарыу, аҙаҡ ҡустыһы менән уйнау, йорт эштәрендә ярҙамлашыу кеүек матур ғәҙәттәре барлыҡҡа килгән.

- Ир менән ҡатын бер-береһенә түгел, ә бер йүнәлештә ҡарарға тейеш. Берҙәм маҡсат менән янһаң ғына ғаилә берҙәм, балалар бәхетле була һәм эшең алға бара, - ти йорт хужаһы. - Айгөл һәр башланғысымды хуплап, дәртләндереп тора. Ҡалала үҫһә лә, ауыл тормошо уны ҡурҡытманы, киреһенсә, һәр эшкәең һыҙғанып тотона. Тәүге осорҙа күпләп ҡош-ҡорт аҫраныҡ. Һунынан бергә кәңәшләштек тә, малды ишәйтергә булдыҡ...

### Уңыш уңғандарға йылмая

Ҙур йылғалар кескәй инештән хасил була. Байгилдиндарҙың йылҡысылыҡ менән шөғөлләнеүе лә бер баш ҡолондан башланған. Уны ла кешенән бурысҡа алған аҡсаға һатып алалар. Ҡолонҡайҙы тәрбиәләп үҫтереп ҡолонлаталар. Артабан аҙ ғына килем ҡулдарына эләкһә лә, йылҡы көтөүен ишәйтергә тырышалар. 2015 йылда крәҫтиән-фермер хужалығы булып теркәлеп, ҡуртымға ер алғандар. Әле хужалыҡтарында ҡолон-тайҙары менән бөтәһе бергә етмеш баш йылҡыһы бар, шунһы утыҙҙан ашыуы - бейә.

-Ҡымыҙ етештереү тураһында хыялланабыҙ ғына әле. Был шөғөл айырым сығымдар талап итә. Һауын бейәләрен айырым көтөүҙә лә хәстәрләргә кәрәк була. Был, тимәк, көтөүсегә ихтыяж буласаҡ тигән һүҙ. Әлегә ит һәм ҡаҙыға һорау ҙур. Баҙар-йәрминкәләргә барып еткәнебеҙ юҡ, өйҙән генә килеп алалар. Элекке һымаҡ, ботлап, түшкәләп түгел, хәҙер кеше күберәк яңы һуйылған иткә өҫтөнлөк бирә, шуға аҙлап һәм йыш алалар, - ти хужабикә.

Беҙ барғанда Айгөл ҡаланан ике аҙнаға бер тапҡыр килгән библиобустан, йәғни күсмә китапхананан китаптар йөкмәп ҡайтып тора ине. Улар араһында Хисмәт Юлдашев, Фәткулла Комиссаров һәм Әхмәр Үтәбайҙың шиғри йыйынтыҡтары ла бар.

- Китап минә ял итергә, һүҙ байлығымды арттырырға, телемде шымартырға ярҙам итә, - ти Айгөл. Әйткәндәй, ул үҙе лә шиғыр яҙа, тәбиғәт күренештәрен, ғаиләһен, балаларын фотоға төшөрөргә ярата. Күп балалы әсәгә "Китап уҡырға, ижад итергә нисек ваҡыт табаһың?" тигән һорауҙы бирмәй булдыра алманым.

- Ауыл халҡының күпселеге кеүек, ярты эшемде иртәнге сәғәттәрҙә эшләйем, - тип яуап бирҙе ул. - Шәхси хужалыҡта мәшәҡәт бөтәмә ни инде, китапты ла эш араһында ғына тотороға тура килә, әммә өҫтән-мөҫтән генә ҡарап сыҡмайым, төбөнә төшөп, хатта төп ролдәргә инеп китәм. Былтыр Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй"ен, Гүзәл Яхинаның "Зөләйха күҙҙәрен аса"һын шулай илай-илай уҡыным. Һәр уҡыған әҫәрҙән тормош һабағы, тәрбиә, фәһем, ғибрәт алам.

Балалары бәләкәй булһа ла, атай-әсәйенең төп ярҙамсылары. Йәшенә ҡарап, бөтә эш бүленеп бирелмәһә лә, барыһы ла үҙе белеп эшләй. Кемдер атаһы менән малға һыу эсерә, икенсеһе бәләкәй туғандарын ҡарай, өсөнсөһө аш-һыу тирәһендә әсәһенә булыша. Гел генә эш менән дә булмай, барыһы ла тәртипкә, билдәле бер системаға һалынғас, хужалыҡ ҙур булһа ла, бергәләп ял итеүгә лә ваҡыттары ҡала. Сит тарафтарға барып, донъя күреү, туристар һуҡмағынан йөрөү әлегә эләккәне юҡ, әммә форсат сыҡҡан һайын тыуған ауылдарының матур урындарына, Нөгөш буйына сығып, ғаилә ялы ойошторалар.

- Йәм тапмайынса ҡалаға киткәндәрҙе аңламайым. Ауылда ла бынамын тигән итеп йәшәргә була бит. Беҙҙә быны йәшелсә үҫтереү, малсылыҡ, умартасылыҡ менән шөғөлләнеү өсөн бөтә шарттар бар. Бер нисә кеше берләшеп эшләргә лә мөмкин. Байлыҡтың өҫтөндә йәшәйбеҙ бит. Нимә сәсһәң, шул уңа. Һәр ғаилә хәҙер бишәр һыйыр тота ала. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы осорҙа кеше йылдан-йыл малын кәметә бара. Нимәгә ышаналарҙыр улар? Күптәр табыш, килем алыу юлдарын белмәй, өйрәнергә лә теләмәй. Артабан да шулай дауам итһә, йөҙәрләгән, меңәрләгән баш йылҡы инләр икһеҙ-сикһеҙ ерҙәребеҙгә башҡалар эйә булырға яҫҡынмаҫмы икән? Еребеҙгә үҙебеҙгә хужа булырға ваҡыт бит, - ти Сәлих.

### Ҡул һелтәп ҡуймаҫҡа

Байгилдиндар ҙа нимәгә тотонһа ла, ахыры хәйерле тамамлана. "Бәхетлеләргә ел һәр ваҡыт ыңғай" тигәндәре тап уларға тап килеп тора һымаҡ.

- Тормошобоҙҙа барыһы ла ыңғай ғына булды. Хөкүмәтебеҙҙән дә беҙгә нимә тейешле, барыһын да алдыҡ. Ауыл ерендә төпләнгән йәштәргә йорт төҙөүгә тәғәйенләнгән сертификат, икенсе балаға Әсәлек капиталын, өсөнсөһөнә йорт төҙөү өсөн участка алдыҡ. Бишенсе бала тыуғас, Айгөл "Әсәлек даны" миҙалына лайыҡ булды, - ти ғаилә башлығы.

- Ыңғай ғына барһа ла, береһе лә еңел генә бирелмәне. Алма беш, ауыҙыма төш, тигән кеүек, береһе лә үҙе килеп ҡапманы. Аҙым артынан аҙым эшләп, йөрөп, өйрәнеп, кәңәшләшеп эшләнелде. Тораҡ төҙөүгә сертификат алыу өсөн әллә күпме белешмә, документ йыйырға кәрәк булды. Быларҙың барыһы ла сабырлыҡ, шулай уҡ юлға сығылмдар ҙа талап итә. Ҡул һелтәп, ярты юлда ҡалмаҫ өсөн бер-беребеҙҙе дәртләндереп, хуплап, ярҙам итеп эшләнек инде. Күптәр, иренеп, тейешле ведомстволарға йөрөмәй, үҙҙәренә тейешлене лә алмай бит. Үҙҙәренең хоҡуғын белмәгәндәр ҙә, белергә теләмәгәндәр ҙә күп. Ә бит ауыл йәштәренә, йәш ғаиләләргә, белгестәргә ярҙам итеү маҡсатында төрлө программалар бойомға ашырыла. Шуларҙың барыһын да файҙаланып ҡалырға кәрәк.

### Тормош йәме - балаларҙа

Һәр ғаилә - бер дәүләт, тибеҙ. Ул, ысынлап та, үҙ ҡануны, ҡағиҙәләре, йәшәү рәүеше, тормош ҡиммәттәре булған ил ул. Байгилдиндарҙың үҙ дәүләте барлыҡҡа килеүгә күп ваҡыт үтмәһә лә, матур ғаилә традициялары бар. Әсә ҡыҙҙарына милли ризыҡтар бешерергә, ә атай улдарын йорт-хужалыҡ эштәренә, шулай уҡ ололарға кешелекле, бәләкәйҙәргә кеселекле булырға, хеҙмәт һөйөргә өйрәтә.

- Ғаиләле булып йәшәү, бала тәрбиәләү - тауға менеү кеүек. Бер бейеклекте менһәң, уның артынан икенсе артылыш булыуы асыҡлана. Фермерлыҡ эшмәкәрлегебеҙ бер ҡолондан башланған кеүек, беҙҙең ғаилә тарихы ла бер һуҡмаҡтан баш алғайны. Бына йәйләп оло юлға сығып киләбеҙ. Бар тырышлығыбыҙ балаларға матур тәрбиә биреп, уҡытып, оло тормош юлына сығарыуға йүнәлтелгән. Уларҙың шат тауышын ишетһәң, мәктәптәге уңыштарын күрһәң, йоҡоһоҙ төндәр ҙә, башҡа мең төрлө мәшәҡәттәр ҙә онотола, - ти Байгилдиндар.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез районы.**

***✓ Бала төймəһен үҙе элеп, ойоҡ-ыштанын үҙаллы кейеп, ниндəйҙер уңыштарға өлгəшеү юлын эҙлəгəндə, əсəй уның юлын яба, хатта тамырынан йолҡа. Һəм ул был хəлде башҡа бер ҡасан да төҙəтə алмаясаҡ!***

ТƏРБИƏ МƏКТƏБЕ

# ƏСƏЙГƏ ƏЙТМƏ,

## йəки Атай йомшаҡлығы насармы?

**Күптəн түгел Əхмəр Үтəбайҙың "Атай тəрбиəһе" һəм "Ҡартатай тəрбиəһе" тип аталған яҙмаларын уҡыным. "Атайҙар улдарын улар үҙҙəре белмəгəндə-һиҙмəгəндə, йоҡлап ятҡанында ғына һөйөргə тейеш", тигəн яҙылмаған ҡағиҙəне телгə алған автор. Был хаҡта минең дə ишеткелəгəнем бар. Ике улым тыуып, шуҡ малайҙар булып үҫеп килгəн дəүерҙə, артыҡ иркəлəтеп, уларҙы "боҙоп" ҡуймаһын тип, бəғзе берəүҙəрҙең миңə - йəш атайға əйткəн шундайыраҡ нəсихəте хəтеремдə. Əйе, тап ана шулай ти торғайнылар ҙа ул, тик, кемдер əйтмешлəй, əйтеүе генə анһат икəн...**



Бала сағымдан хəтерлəйем, минең атайым үҙе беҙгə - улдарына ҡарата ярайһы ғына ҡəтғи, хатта ҡайсаҡ һəүетемсə уҫал ғына булды. Дүрт малайҙы тəрбиəлəү өсөн бер аҙ уҫаллыҡ та талап ителгəндер инде. Һəр хəлдə, өрлөк башына ҡыҫтырып ҡуйылған селек сыбыҡ ныҡ ҡына хəтеремдə ҡалған. Үҙ-ара бер аҙ ғына бəхəслəшə башлаһаҡ, беҙҙе татыулаштырыу өсөн атайымдың ана шул сыбыҡҡа ымлауы ғына ла етə торғайны. Ул өйҙə юҡ саҡта бер аҙ эш боҙғолағаныбыҙ хаҡында əсəйем атайыма өндəшмəүҙе хуп күрҙе. Мин əле яҡты донъяға тыумаған саҡта ғаилəбеҙҙəге иң оло ағайым шырпы менəн булышып, хатта өйҙө лə үртəп ебəргəн булған икəн. Өйөбөҙ бөтөнлəйгə көлгə əйлəнгəн. Ағайымдың бəхетенə, атайым был саҡ ҡырҙа булған... Унһыҙ ҙа етешһеҙ йəшəгəн ғаилə башына (һуғыштан һуңғы бер-ике йыл тирəһе осор) төшкəн бындай бəлə-ҡазаның нисек ауыр нəтижəле булыуын күҙаллайым. Янғын бəлəһенең ғəйеплеһе ана шул ағайым икəнен əсəйем хатта ғүмере буйы сер итеп һаҡлаған. Был хаҡта атайымдың вафатынан һуң ғына белдек. Егерме биш йылға яҡын офицер-ракетчик булып хеҙмəт итеп, хəҙерге ваҡытта үҙе һикһəнгə яҡынлашҡан отставкалағы ағайым үҙенең ана шул бала саҡ хəтирəлəре менəн хəҙер бүлешеп алғылай...

Атайым, ысынында иһə, тыштан ҡарағанда ғына шулай ҡəтғи тойолғандыр. Мин бала саҡта, таң менəн янъыма килеп, һаҡалы менəн битемде сəнстерə-сəнстерə: "Малай, малай, малай", тип, арҡамдан һөйгөлəп, юрғанымды төҙəтеп киткелəгəнен яҡшы хəтерлəйем. Шул саҡ гел генə уяу булыуыма ҡарамаҫтан, йоҡлағанға һалышып, рəхəтлəнеп ятып ҡалыуҙы хуп күрə торғайным. Бəлəкəс ҡустымды ла атайымдың ана шулай итеп иркəлəгəне хəтеремдə. Ə əсəйем, əлбиттə, үҙенең беҙгə ҡарата булған йылы хистəрен əллə ни йəшермəне. Уның йомшаҡ ҡулын һəр саҡ тойоп үҫтек.

Үҙебеҙ башлы-күҙле булып, балаларыбыҙ менəн атай-əсəй янына ҡайта башлағас, нəҡ Əхмəр Үтəбай əйтмешлəй, атайым (хəҙер инде ҡартатай ролендə) бөтөнлəйгə икенсе тəрбиəсегə əйлəнде. Əсəйем мəрхүмə əйтеүе буйынса, беҙ бəлəкəй саҡта сəңгелдəк эргəһенə лə һирəк кенə барған булған икəн атайым. Ə инде өйгə ейəндəрен алып килеү менəн бар донъяһын онота, үҙе бала кешегə əүерелгəндəй була ине. Бəлəкəстəрҙең артынан шыуышып, өҫтəл, хатта урындыҡ аҫтынаса инеп китə, улдарымды тотоп, икеһен алмаш-тилмəш һаҡал-мыйыҡтары менəн сəнстергелəп, "ойпалап" ала торғайны. Һаман да əлеге "Малай, малай, малай", тигəн һүҙҙəр менəн. Атайым намаҙ уҡый башлаһа, ул сəждəгə киткəн мəлендə ике йəшлек кенə Салауат улым уның артынса "əннə", тип йөҙтүбəн "йығылып" китер ине.

Ə инде үҙемə килгəндə, балаларҙы йоҡлап ятҡан мəлендə генə һөйөү кəрəклеге хаҡындағы ҡағиҙəне йыш ҡына "боҙғоланым". Уйнап йөрөгəн еренəн йə Салауатымды, йə Азатымды тотоп ала килеп, атайым мəрхүмдең "Малай, малай, малай" һүҙҙəрен ҡабатлай-ҡабатлай, арҡаларынан тупылдатып ҡағып алғылай торғайным. Хəлəл ефетем, ҡайсаҡ "Нимəгə иркəлəтəһең малайҙарыңды, бер ҡасан башыңа менеп ултырһалар, күрерһең əле", тип иҫкəртеүенə лə ҡарамаҫтан. Бына шулай, хистəремде əллə ни йəшерə алмаған кешемендер инде мин үҙем. Хатта улдарым яңылыш ҡына берəй нəмə боҙа ҡалһа, əсəһенəн йəшереп, миңə генə əйтə торғайнылар. "Əсəйгə өндəшмə", тиһəлəр, мин уларҙың һүҙен тыңлай инем. Берəй бəлəкəй генə йомошто үтəгəндəн һуң малайҙарым: "Үəт, минең улым - шəп!" тип əйт инде, атай", - тиҙəр ҙə, минəн үҙҙəре телəгəн һүҙҙəрҙе ишеткəс, ифрат ҡəнəғəт булып китəлəр.

Һəр саҡ малайҙарын һөйөп кенə йөрөгəн икəн был атай кеше, тип уйлаһағыҙ - яңылыштығыҙ. Кəрəк сағында уҫал ғына ла була белдем. Беҙҙең хəрби ҡаласыҡтың таш өйөнөң түбəһендə сыбыҡ ҡыҫтырып ҡуйырға өрлөк булманы бит инде. Селек сыбыҡ ролен ишек төбөндə эленеп торған портупея (офицерҙар билен быуып йөрөй торған яҫы ҡайыш) уйнағыланы шулай ҙа. Малай халҡына "аҡыл сыбығы" тигəн нəмə лə бəғзе ваҡыт кəрəктер шул... Бер аҙ ғына "элəктереп" алыуҙы шəриғəт тə тыймай. Шулай уҡ улдарым тышта башҡа малайҙар менəн һуғышып, күҙҙəренə "фонарь" алып килгелəгəн хəлдə, уларҙы яҡлашып, балалар араһына барып ҡыҫылышып та йөрөмəнем. Малай кеше үҙен үҙе яҡлашып өйрəнергə тейеш, тигəн инаныуҙа булдым һəр саҡ.

Тормош артабан дауам итə бит инде. Улдарым, əлхəмдүлиллаһ, иркə булып үҫмəне. Бер-бер артлы инде үҙҙəренең бəлəкəстəрен алып килеп күрһəткелəй ҙə башланылар. Улдарын да, ҡыҙҙарын да. Хəҙер инде ейəн-ейəнсəрҙəремə ҡарайым да, үҙемдең йəш сағымда ҡайһы берҙə "офицер портупеяһын" тамыҙғылаған малайҙарымдың бала сағын иҫлəп, уларҙы ныҡ йəллəйем, ышанаһығыҙмы... Үҙем улдарыма инде: "Балаларығыҙҙы ҡаҡмай-һуҡмай ғына үҫтерегеҙ",- тип нəсихəттəр уҡып ҡына торам. Айырыуса, ҡыҙ балалар йəл. "Алтын ҡоштарым" тип һөйəм уларҙы һəр саҡ. Ейəнсəрҙəрем янына күстəнəсһеҙ ингəн ваҡыттарым бик һирəктер. Һəр бер хəрəкəтен хуплап ҡына торорға тырышам ҡыҙҙарымдың. Дүрт йəшлек Сафия "Үəт, маладис", тип маҡтаһам: "Ҡартатай, һин урыҫса əйтмə, башҡортса əйт", - ти. "Һай, афарин, ҡыҙым!" "Улай ҙа түгел..." "Ə нисек итеп əйтəйем һуң?" "Үəт, минең ҡыҙым шə-ə-əп!", тип əйт... Нəҡ тə атаһының бала сағы. Хəлəл ефеттəре менəн берлектə, малайҙарым (улар инде əллə ни малай ҙа түгел, ҡырҡтан аша атлап уҙып баралар) үҙҙəренең ҡыҙҙарын сəскəлəй наҙлап, ел-ямғыр тигеҙмəй үҫтереп алып килəлəр, əлхəмдүлиллаһ.

Иркə генə үҫкəн балаларҙың да бынамын тигəн кеше булып китеүе, шул уҡ ваҡытта ҡаты тəртип булдырылған ғаилəлə тəрбиəлəнгəндəрҙең дə артыҡ яҡшы булмай үҫеп етеү осраҡтары ла күп бит. Тирə-яҡҡа баҡһаң, шундай миҫалдарҙы ла күрергə була. Был ҡатмарлы тормошта балалар тəрбиəһен ниндəйҙер берəй ҡалыпҡа ғына һалып булмайҙыр тимəксемен. Минеңсə, иң мөһиме - балаларҙың имани рухта, ата-əсəгə, туғандарға, башҡа кешелəргə ҡарата миһырбанлы, ғəҙел, тəртипле, эшһөйəр кеше булып үҫеүе. Уларҙа миллəтеңə, өммəтеңə хөрмəт тойғоһон тəрбиəлəү, ошо процесста иң башта үҙеңдең өлгөлө атай, əсəй булыуың мотлаҡ. Һəр хəлдə, мин бына шундай фекерҙəмен.

**Хəлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛƏЙ

# БУЛА КҮҢЕЛЕ - АҠ ҠАҒЫҘ



**Беҙ өлкəнəйгəс кисергəн күп кенə проблемалар һəм комплекстар бала саҡ иленəн. 13 йыл психологик консультациялар үткəрəм һəм ошо осорҙа миңə төрлө проблемалар менəн мөрəжəғəт итеүселəр күп булды. Кешелəрҙе "Мин кем?", "Үҙеңде нисек ышаныслы тоторға?", "Ниңə мин бəхетһеҙ?" тигəнгə оҡшаш һорауҙар бала саҡтан борсой, тора-бара күтəрə алмаҫлыҡ ауырлыҡҡа, комплексҡа əүерелə. Күптəр бала тəрбиəлəгəндə атай-əсəһенең хатаһын ҡабатлай. Ни өсөн "Мин" образында бушлыҡ формалаша һуң, һəм бында оло быуындарҙың тəжрибəһе ниндəй роль уйнай?**

Күп кенə атай-əсəйҙəр балаларын төрлө физик һəм психологик йəрəхəттəрҙəн ҡурсаларға тырыша: иреш-талаш ишетмəһендəр, ҡурҡыныс йəнһүрəт ҡарамаһындар, компьютер артында оҙаҡ ултырмаһындар. Ə инде ҡолау, əйберен юғалтыу, үпкəлəү кеүек балалар проблемаһын иркəлəү-яратыу, тəмлекəс биреү юлы менəн хəл итəлəр. Бəлки, был атай-əсəйҙəр дөрөҫ эшлəйҙер ҙə. Лəкин шул рəүешле бала психикаһына ниндəй йоғонто яһалыуы тураһында күптəре уйлап та бирмəй. Уйланыу өсөн бер нисə миҫал килтерəм.

**Беренсе.** Контроль эште "2"-гə яҙыуын белеп, бала нык борсола. Əсəһе уның кисерештəрен аңларға тырышыу урынына "Мыжыма, уҡырға кəрəк ине" ти, йəки проблеманы бөтөнлəй инҡар итə. Йəиһə ҡысҡыра, əрлəй һəм яза бирə. Əлбиттə, бала быға үпкəлəй, ул үҙен япа-яңғыҙ тоя, əсəһенең ғəҙелһеҙлегенə хəтере ҡала. Ə əсəй кеше үҙенең бала саҡ тəжрибəһенəн сығып эш итə, уға ла ҡасандыр шулай яуап биргəндəр. Бындай осраҡта ни бары: "Һин үҙ көсөңə ышанмай инеңме? Яҡшыраҡ билдə алыр өсөн нимə эшлəргə кəрəк?" - тигəнгə оҡшаш һорауҙар бирергə кəрəк ине.

**Икенсе.** Əсəй балаһын балалар баҡсаһынан барып ала. "Алина ҡурсағымды боҙҙо", - тип ҡысҡырып илай бəлəкəс. Əсəһе уны йыуата-йыуата магазинға алып инə, тəмлекəстəр йə уйынсыҡтар һатып ала. Бындай осраҡтар йыш ҡабатлана. Һөҙөмтəлə Зарина, үҫкəс, психологка ярҙам һорап барасаҡ.

**Өсөнсө.** Əсəһе Илшатҡа һəр ваҡыт: "Илама, һин бит малай!" - тип ҡабатлай. Баланың борсолоуҙары хаҡында уйланмай. Һөҙөмтəлə, был бала тойғоларын эсендə йəшерергə күнегə һəм үҫеп еткəс тə ҡорбан сифатында йəшəйəсəк. Үҙ өҫтөндə эшлəмəһə, уны һəр ваҡыт үпкəлəтəсəктəр, унан көлəсəктəр.

**Дүртенсе.** Əгəр ҙə Дамирҙың əсəһе уның дуҫтарының ҡылығына - уйынсығын боҙоуҙарына, туҡмауҙарына, үпкəлəтеүҙəренə, бүтəн проблемаларына бөтөнлəй иғтибар итмəһə һəм бындай осраҡтар йыш ҡабатланып торһа, балала үҙен һаҡлау механизмы булараҡ психосоматизация башлана. Юҡ, ул башҡаса иламай ҙа, мыжымай ҙа, тик ауырыуға һабышасаҡ. Былар барыһы ла ҡасандыр "баҫылған" эмоциялар арҡаһында барлыҡҡа килə.

**Бишенсе.** Өс йəшлек Саматты əсəһе самаһыҙ ҡурсалай: балғалаҡтан ашата, кейендерə-сисендерə, ул бының менəн формалашып килеүсе шəхестең "Мин" системаһын "баҫа". Бала төймəһен үҙе элеп, ойоҡ-ыштанын үҙаллы кейеп, ниндəйҙер уңыштарға өлгəшеү юлын эҙлəгəндə, əсəй уның юлын яба, хатта тамырынан йолҡа. Һəм ул был хəлде башҡа бер ҡасан да төҙəтə алмаясаҡ! Үҙаң үҫешенең үҙаллылыҡ формалашҡан ваҡыты үткəн була. Самат "əсəй малайы" булып үҫə, сөнки ул үҙ өҫтөнə яуаплылыҡ ала белмəй.

Килтерелгəн миҫалдарҙа "Мин" образында формалашҡан бушлыҡ проблемаларының береһе генə сағылыш тапты. Бала саҡта барлыҡҡа килгəн проблемалар комплексы менəн өлкəндəр психологка мөрəжəғəт итə. Уларға аң формалашыуында барлыҡҡа килгəн бушлыҡты "табыуы" ҡыйынға тура килə. Ə психологтың эше - өлкəн кешенең аңындағы бушлыҡты табыу һəм "йəбештереп" ҡуйыу. Тик нисек? Тыңлай белеү, борсолоу зонаһынан баҫылған тəжрибəне "өҫкə" сығарыу һəм, əлбиттə, психологик ярҙам күрһəтергə тырышыу. Лəкин был еңел түгел. Психика үҙе кешегə бушлыҡтарҙы тултырырға ярҙам итешə, бер бөтөндө тулыландыра. Тик был ярҙамсы механизмдар үрелеп барыуы мөмкин. Бөтəһе лə атай менəн əсəйҙең балаға ҡарата мөнəсəбəтенə бəйле.

**Олеся БУРОВА,
педагог-психолог.
Учалы ҡалаһы.**

ШУНДАЙ ХӘЛДӘР

**Күптән түгел баш ҡалалағы ер аҫты үткәүелдәренең береһендә өйҙә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә һәләк булған ҡатындарҙың фотолары ҡуйылған галерея барлыҡҡа килде. Был - тормош ысынбарлығының бер күрһәткесе. Бөгөн күп ҡатын-ҡыҙ ғаиләһендә иҙелеп, әммә түҙеп йәшәй, тиергә мөмкин. Күптәре өйҙәге сүпте тышҡа сығармайым тип, теш ҡыҫа, бәғзеләре иһә барыр, морон төртөп һыйыныр ере булмағанлыҡтан, башын баҫып йәшәй бирә. Шул уҡ ваҡытта республикала ауыр хәл-торошта ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам хеҙмәттәре лә уңышлы эшләп килә. Редакциябыҙҙың ҡунағы, баш ҡалалағы "Ғаилә" ресурс үҙәгенең шундай бүлек мөдире Венера ҒАФАРОВА менән бөгөн ошо темаға һөйләшәбеҙ.**

# АТТА ЛА, ТӘРТӘЛӘ ЛӘ...





➔ **Тәүҙә уҡ шуны асыҡлап үтәйек: тормошта ауыр хәл-торошта ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам бүлегенең бурыстары ниҙә?**

- Өфө ҡалаһының "Ғаилә" ресурс үҙәгендә ғаиләлә йәберләүҙәргә дусар ителгән ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам күрһәтелә. Бында улар ике айға тиклем йәшәү урыны менән тәьмин ителә, психологик, юридик ярҙам күрһәтелә.

➔ **Ҡатын-ҡыҙҙарҙың шундай хәлгә төшөүендә кем гәйепле: ир-атмы, әллә үҙҙәреме? Ни тиһәң дә, гәйеп бер яҡлы ғына булмай...**

- Ысынлап та, ғаиләләге проблема бер ваҡытта ла бер яҡлы ғына булмай. Атта ла, тәртәлә лә, тиҙәр бит. Ғәмәлдә ошондай хәлгә төшкән ғаиләләрҙә кем гәйепле икәнен асыҡлар өсөн беҙ тәүҙә уларҙы консультацияға саҡырабыҙ. Башта ҡатын-ҡыҙҙы тыңлайбыҙ, ул үҙ күҙлегенән сығып һөйләй. Әлбиттә, ул ирен, үҙебеҙсә йәшәргә бирмәйҙәр, тормошобоҙға ҡыҫылалар, тип, уның атай-әсәйен гәйепләргә мөмкин. Ләкин бына ошо үҙәктә 3-4 ай эшләгәс: "Туҡта, мин бит әле ҡатын-ҡыҙҙы ғына тыңлайым, ир кешене лә саҡырып тыңларға кәрәк", - тигән фекергә килдем һәм көслө затты ла аңғәмәләшергә саҡыра башланым. Асыҡланыуынса, ир-ат та ярҙамға бик мохтаж булып сыҡты. Уларға беҙ психолог консультацияһы тәҡдим итәбеҙ һәм беҙҙә ғаилә медиацияһы тигән хеҙмәт тә бар.

➔ **Ошо эшләү дәүерегеҙҙә бүлексәлә күпме ҡатын-ҡыҙ булып китте һәм улар буйынса анализ эшләнеме: улар ниндәй төркөмгә ҡарай, ҡабат-ҡабат эләгеүселәр бармы?**

- Асылғандан алып үҙәктә булған ҡатын-ҡыҙҙар статистикаһына күҙ һалһаҡ, улар артыуға табан бара. 2016 йылда барлығы 10 ҡатын-ҡыҙҙы һәм 8 баланы ҡабул итһәк (6 ҡатын өйҙә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә беҙгә килеп эләккәйне), былтыр беҙгә килеп эләгеүсе 68 ҡатын-ҡыҙҙың 39-ы ғаиләлә көс ҡулланыуҙан ҡасыусылар булды. Быйыл пандемия һәм ҡурсаланыу шарттарында йәшәүгә ҡарамаҫтан, 45 ҡатын-ҡыҙ, шул иҫәптән 28-е ғаиләлә көс ҡулланыу һөҙөмтәһендә беҙгә мөрәжәғәт итте. Мөрәжәғәт итеүселәр категорияһы төрлө, шулай ҙа тәү сиратта ғаиләлә йәберләүгә дусар булған ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡабул итергә тырышабыҙ. Граждандыҡ никахында йәшәүселәр ҙә бар. Балалары тыуғас, уларҙы тәрбиәләргә һәм ҡарарға финанс мөмкинлектәре, йәшәргә урындары булмаған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа мөрәжәғәт итә. Ҡабат, йәғни икешәр тапҡыр мөрәжәғәт итеүселәр ҙә булды. Мәҫәлән, Өфө янындағы ауылдарҙың береһенән бер ҡатын беҙгә өс тапҡыр килде. Иренең шул тиклем йәберләүенә ҡарамаҫтан, ул ҡабат-ҡабат өйөнә ҡайтты. Психологтар ҡатын-ҡыҙҙың бындай тәртибен "бәйлелек" тип атай. Күп осраҡта ҡатын-ҡыҙ йыйған донъяһын, йортон ҡыҙғанып, үҙе тураһында уйламай.

Шуны ла әйтеп китергә кәрәк: беҙҙең хеҙмәт БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығына ҡараған өс бүлектә эшләй, ауыр хәлдә ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарға ярҙам итеү бүлеге республикала иң ҙуры, Өфөлә урынлашҡан һәм 20 койка-урындан тора. Тағы ла бындай бүлектәр Белорет ҡалаһында (4 койка-урын) һәм Тәтешле районының Үрге Тәтешле ауылында (2 койка-урын) бар. Бынан тыш, 8 зонала район-ара үҙәктәр, һәр бер муниципаль районда, ҡалала 69 ғаилә бүлеге бар. Беҙ йыш ҡына радионан, телевидениенан сығыш яһайбыҙ, киң мәғлүмәт саралары, социаль селтәрҙәр аша шундай хеҙмәт барлығы хаҡында белдереп торабыҙ.

➔ **Бөгөн ҡатын-ҡыҙҙың ир-егеттәрҙән бөркөт яһар энергияһы ҡайҙа? Бәлки, уны тәғәйенләнеше буйынса түгел, икенсе мәнфәғәттә тотоноуға сарыф итеү һөҙөмтәһендә үҙебеҙ уҡ зыян күрәбеҙҙер?**

- Тулыһынса килешәм. Ни өсөн ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәрҙән дә көслөрәк булып китте әле ул? Бында шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: ҡатын-ҡыҙҙың ир-егеттән ҡалышмай белемгә ынтылыуы, етәксе урындарҙа эшләүе, ғаиләгә уның ваҡыты, энергияһы әҙ ҡалыуы сәбәпле, бәлки, ысынлап та, үҙебеҙ ҙә зыян күрәбеҙҙер. Ирҙең алдынан алып, алдынан төшөп, сабырһыҙланып эшләүебеҙ, күпселек мәсьәләләрҙе ғаиләлә лә ҡатын-ҡыҙҙың үҙенең хәл итергә тырышыуы, бәлки, ир-егетте ситкә этәрәләр, тип уйлайым. Киреһенсә, ир-егеттең алдынан төшмәй, уларға күберәк мөмкинлектәр бирергә, яуаплылыҡ өҫтәргә кәрәктер. Бының, әлбиттә, ниндәйҙер билдәле рецептары юҡ, әммә һәр ҡатын-ҡыҙға ошо серҙе үҙе таба алыу һәләте бирелгән.

➔ **"Ғаилә" ресурс үҙәгенең һеҙҙең бүлек күрһәткән ярҙамы - ул ваҡытлыса ғына ярҙам. Ошо ваҡыт эсендә ҡатын-ҡыҙ үҙгәреп, тормошҡа яңы ҡараш булдырып, уй-фекерен тулыһынса үҙгәртеп өлгөрәме?**

- Әлбиттә, беҙ ваҡытлыса ғына ярҙам күрһәтәбеҙ. Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙенә бер төрлө, индивидуаль. Уларҙың ҡайһы берҙәре ошо арала тормошҡа ҡарашын үҙгәртә, яңы ҡараш булдырып, йәбергә дусар булмай йәшәргә үҙенә-үҙе маҡсат ҡуя. Яңы тормош башлаған ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бик күп. Шул уҡ ваҡытта ҡабаттан ғаиләһенә, ҡул күтәргән иренә ҡайтып, тағы ла шул уҡ тормош һаҙлығына батыусылар ҙа юҡ түгел. Шуны ла билдәләп китер инем, беҙҙең үҙәк психологтары менән һөйләшкәндән һуң тормошҡа ҡарашын үҙгәрткән ирҙәр ҙә бар. Улар хаталарын аңлап, бынамын тигән итеп йәшәп тә китәләр. Тағы ла шул: ҡатын-ҡыҙ беҙҙең бүлектән сыҡҡанда ул йәшәгән муниципаль районды йәки ҡаланың ғаилә хеҙмәтенә хат ебәрелә һәм социаль хеҙмәттәр уларҙы уларҙы ғаилә хеҙмәтенә иҫәпкә алалар. Бында "Иҫәптә тора" тигән һүҙҙән ҡурҡырға кәрәкмәй, ғаилә хеҙмәттәре - улар яза биреү йәки контролдә тотоу өсөн түгел, киреһенсә, ғаиләгә ярҙам итер өсөн булдырылған.

➔ **Ниндәй генә проблема килеп тыуһа ла, уның башын ғаиләгә бәйләйбеҙ. Шул күҙлектән сығып фекер йөрөткәндә, бөгөн ҡатынына ҡул күтәргән, гүзәл затты йәберләгән ир-атты ла бит әсәләр тәрбиәләгән. Тимәк, йәмғиәттә ғаилә институтына иғтибар бер яҡлы ғына алып барыла, йәғни матур, татыу ғаиләләрҙе күрһәтәбеҙ, күккә күтәрәбеҙ, ә имен булмаған ғаиләләр менән эшләү, бигерәк тә ауылдарҙа, тейешле кимәлгә ҡуйылмаған...**

- Эйе, проблеманы йәшереп ҡалдырыу менән ул бөтмәй, ә уны хәл итеү юлдарын, уның сығанағын эҙләргә кәрәк. Хәҙерге ваҡытта ауыл биләмәләре советтарында эш төркөмдәре булдырыла. Уларға ауыл советы, ғаилә хеҙмәте белгестәре инә һәм һәр бер имен булмаған, матди яҡтан етеш булмаған ғаиләләрҙе иҫәпкә алыу буйынса ҙур эш алып барыла. Бәлки, ғаиләләр, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар, ысынлап та, өйөндәге хәлде тышҡа сығарырға ҡурҡалыр йәки ояла-лар, әммә ғаилә хеҙмәттәренә улар ышанып мөрәжәғәт итергә һәм был органдың тик ярҙам итеү өсөн булдырылыуын аңларға тейеш.

Ғөмүмән, ғаиләлә көс ҡулланыуҙың сәбәптәре төрлөсә. Бәлки, генетика ла йоғонто яһайҙыр. Миненсә, әгәр ҙә әсәһе ғаиләлә йәбергә дусар булған икән, мәҫәлән, ҡыҙ бала ошо ғаилә моделен үҙ ғаиләһенә күсерә. Ирекһеҙ рәүештә үҙенә лә шундай йәберләүсе ир таба. Был төпкә аң кимәлендә башҡарыла, йәғни бала сағынан уҡ үҙенә шундай программа һала. Шундай ғаиләлә малай кеше тәрбиәләнһә, ул атаһының ҡылығын, тәртибен, холҡон үҙ ғаиләһенә күсерә. Йәғни ғаиләлә атай менән әсәй үҙен нисек тота - шул уҡ ғаилә моделе уларҙың балаларына ла күсә. Ҡайһы бер осраҡта киреһенсә булыуы ла мөмкин. Тимәк, балалар аңға һалынған ғаилә программаһын үҙгәртә алған һәм был бик яҡшы.

➔ **Нисек кенә булмаһын, ҡатын-ҡыҙ - донъя тотҡаһы, башты бороусы муйын. Ошо вазифаһын юғалтҡан гүзәл затҡа ҡабаттан ихтирам, иғтибар, мөхәббәт яулау өсөн ниндәй булырға кәрәк?**

- Беҙҙең йәмғиәттә матур ғаиләләр бик күп. Ошо ихтирам, иғтибар, мөхәббәтте ғаиләлә ике кеше булдыра. Ике кеше мендәр, миллиондар араһынан табышып, ғаилә ҡорған икән, улар икеһе лә берҙәй яуаплы. Әгәр балалар артабан да үҙ ғаиләләрендә шундай уҡ аралашыуҙы дауам итһен тиһәң, ғаилә ҡорғанда уҡ ике кеше үҙ-үҙенә ошо яуаплылыҡ алғанын тойорға, аңларға тейеш. Шуға бала табыуға ла еңел генә ҡарарға ярамай. Тағы шуны өҫтәп әйтер инем: халыҡ йолаларынан, традицияларынан йыраҡ китмәҫкә ине ул. Элек һәр бер ауылда тиерлек, ғаилә ҡорған кешегә иң ихтирамлы, иң матур, лайыҡлы ғаиләләрҙән морондоҡ атай-инәй билдәләгәндәр. Улар ир-егеттең дә, ҡыҙҙың да нәҫел-нәсәбенән булмаған. Әгәр ҙә ғаиләлә һауыт-һаба шылтырай ҡалһа, улар үҙ ата-әсәләренә йүгермәгән, морондоҡ атай-инәйҙәренә мөрәжәғәт иткән. Шулай итеп, ике яҡтың да туғандарын үҙ араларына ҡыҫтырмай ғына проблемаларҙы йырып сыҡҡандар. Бөгөн республикала "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы бик әүҙем эшләп килә, улар ошо морондоҡ атай-инәй булдырыу йолаһын да ҡабаттан тергеҙеп ебәрһә, өлгөлө ғаиләләр йәштәргә үҙҙәренең нәсихәтен биреп, ауыр мәлдәрендә таяныс булып торор ине, тигән фекерҙе лә еткереп ҡуяйым әле. Ғәҙәттә, ағинәйҙәр бындай идеяларҙы бик тиҙ тотоп алыусан бит. Ғөмүмән, ғаиләләрҙең нигеҙен нығытҡан, матур балалар тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән йолалар күп бит беҙҙең башҡортта. Шулар ҡабат ҡайтһын ине тормошобоҙға...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ИР-ЕГЕТ ҠОЛАҒЫНА...

## МАҠСАТЛЫ БУЛЫҒЫҘСӘЛЕ



**Ниндәй булырға тейеш һуң бөгөнгө башҡорт ир-егете? Заман менән бергә атлаусы, яңылыҡтарҙы тойоп, уларҙы үҙенә яраҡлаштыра алыусы, маҡсатҡа ынтылыусан, һәр саҡ үҫеү юлында тороусы.**

Милләттәш ир-егеттәребеҙҙә был сифаттар етеңкерәмәй. Улар донъяны һоро күҙлектәр аша күрә лә, миңә генә теймәһендәр ине, мин дә бер кемгә лә теймәҫ инем, тип йәшенеп йәшәй. Ә заман әүҙемлек талап итә. Кис һайын өйөнә ике түтәрәм икмәк алып ҡайтып, буш ваҡытын телевизор алдында үткәргән ирҙәр халҡыбыҙҙың киләсәге була аламы? Лайыҡлы ир, атай, ғаилә башлыҡы була алалармы?

Бөгөнгө башҡорт ир-егете ниндәйҙер бер кимәлгә етә лә, туктап ҡала. Уның артабан үҫергә теләге юҡ. Тормошто ошо кимәле етәсәк, тип уйлай ул. Туктағас, деградация башлана. Ә ир-егеттәр заман менән бергә атларға тейеш.

Гүзәл заттар көслө заттарыбыҙҙан ошо әүҙемлекте талап итә. Һәр саҡ юғары маҡсаттар ҡуйып, шул маҡсаттарға ынтылған, финанс планында ла, рухи планда ла һәр саҡ үҫеш юлында булған ир-егеттәр өлгөлө ғаилә башлығы, халҡыбыҙҙың лайыҡлы улдары булһын ине, тип теләйем. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһы ла ошоно теләйҙер ир-егеттән. Шулай түгелме?

**Вәсилә ҒӘНИЕВА.**

***✓ Шул саҡ Кәрим Сәмиғулла яғына боролдо: "Сәмиғулла, мин һиңә бөгөн класташтарым алдында оло рәхмәтемде еткерәм. Рәхмәт һиңә! Әгәр ҙә һин биш йыл элек минең намыҫымды ҡуҙғатмаған булһаң, быларҙың береһе лә булмаҫ ине".***



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ХОҘАЙ БИРГӘН МАЛАЙ

(Хикәйә)

* * *

"Ювелир оҫталары" затында малай тыуыуы ғәҙәттән тыш хәл булып ҡабул ителде. Сәскәләр араһында үҫкән берҙән-бер дегәнәккә ҡарата ниндәй мөнәсәбәт булһа, бында ла, хәҙер инде Кәримдең үҙ исеменә оҡшатып ҡушылған Карам атлы йоморо ҡара малай ауылда һәм тирә-яҡ ауылдарҙа төп "сәйнәү объекты"на әүерелде. Бының әтнәкәһе ябай ғына: сәскәләр нисек кенә күҙҙең яуын алырлыҡ булмаһын, кеше улар араһындағы берҙән-бер булып айырылып ултырған дегәнәккә иғтибар итә. Иген баҫыуында ла иген түгел, башаҡтар араһында яңғыҙ һерәйеп ултырған көнбағыш күҙгә ташлана.

Шуға ла "Һөйләрҙәр һөйләрҙәр ҙә, арыған, бер туҡтарҙар әле. Кем хаҡында ғына нимәләр генә һөйләнелмәй", тип тәүҙә Кәрим барыһына ла ҡул һелтәп ҡарағайны. Тик һис тә туҡталырға оҡшамағайны уның һәм ҡатынының өҫтөнә ғәйбәт өйөү. Һуңғы көндәрҙә хатта малайҙың атаһының Кәрим икәнлегенә шикләнеп ҡараусылар күбәйеп китте. Имеш, Зөләйха тыума тапҡан. Имеш, малайҙың атаһы бөтөнләй башҡа кеше. Карамдың ысын атаһын сырамытыусылар ҙа бар икән хатта. Күбеһен Кәримдең ни рәүешле итеп башҡаларҙың төшөнә лә инмәгән ҡиммәтле машина һатып ала алыуы борсой икән. Имеш тә, улар балалар йортонан аҫрауға малай алып, Әсәлек капиталын ҡиммәтле машинаға тотонған. Был фаразды яҡлаусылар шыр ҡыҙҙар араһында йоморо ҡара малайҙың пәйҙә булыуын шул рәүешле аңлатып маташа.

Кәримде иһә, бөтөнләй башҡа мәсьәлә, ысынлап та, борсой ине. Ул да булһа, улы тыуыуға бәйле тик дүрт кеше, ағалы-кустылы Ғәлим һәм Ғәлләм Сынбулатовтар, ҡатыны менән үҙе генә белгән хәл. Барыһынан бигерәк, ул ошо серҙең сиселеренән ҡурҡты Кәрим. Улы Карамға "Тыуыу тураһында таныҡлыҡ" алырға тип район үҙәгенә барғанда ул баш табиб Ғәлим Сынбулатовтың янына инеп тә сыҡты. Уны күргәс, баш табиб бүлмәһен тултырып хахылданы.

\- Ҡотлайым, Кәрим әфәнде, эш тәжрибәмдә бындайын да хәлгә осрағаным юҡ ине әле. УЗИ тыуыр сабыйҙың енесен йыш ҡына яңылыш күрһәтә. Был - ғәҙәти хәл. Ә бына бер үк сабыйҙың бер ай эсендә ҡыҙ һәм малай булып тыуыуы медицина тарихында тәүге тапҡырҙыр...

\- Уныһы шулай, Ғәлим ағай. Тик бына был хаҡта тик үҙегеҙ генә белһәгеҙ, бик яҡшы булыр ине, тием. Юғиһә, ауыл төрлө хәбәрҙәр менән тулды...

\- Борсолма, Кәрим ҡустым. Беҙҙә һәр табиптың "үҙ зыяраты" ғына түгел "йәшерен экциклопедияһы" ла бар. Ул серҙәр һандығында ниҙәр генә юҡ. Кешеләр беҙгә үҙенең тәнен генә түгел, йәнен дә, бер кемгә лә һөйләргә баҙнат итмәгән серҙәрен дә ышанып тапшыра. Беҙ ул зыяратты ла, энциклопедияны ла үҙебеҙ менән "теге донъяға" алып китәбеҙ. Донъяла бөтөнләй һөйләргә ярамаған серҙәр ҙә була...

Справка алырға килгәндә баш табиб үҙен бик ҡоро һәм рәсми тотһа, был юлы Кәрим менән йәйелеп китеп, иркенләп һөйләште. УЗИ-ға бәйле бер көләмәс тә һөйләп алды. Имеш, бер ауырлы ҡатын УЗИ-ға барып ҡайтҡас, ире:

\- Әсәһе, малаймы, ҡыҙмы? - тип һораған.

\- Ана, башҡа ҡатындарҙың ирҙәре УЗИ-ға бергә баралар. Хатта тыуасаҡ балалары менән һөйләшәләр. Ә һин? Шәп булғасың, үҙең бар ҙа ҡара. Әйтмәйем, анһат кәрәк һиңә, - тип яуаплаған ҡатыны.

Ай самаһы ваҡыттан һуң ҡатын тағы ла УЗИ-ға барған. Буласаҡ атай ҙа уға эйәргән. УЗИ аппаратын тоташтырғандан һуң ир мониторға ҡараһа, әсәһенең ҡарынындағы бала һул ҡулы менән йән ерен ҡаплаған да, уң ҡулы менән атаһына йоҙроҡ күрһәтә, имеш...

Ғәлим Сынбулатов менән осрашып ҡайтҡандан һуң Кәрим еңелсә һулыш алып, үҙ-үҙенә икенсе күҙлектән, ситтән ҡарай башланы. Тик уның улы тыуыуға һәм машина һатып алыуға бәйле ғәйбәт һүҙҙәр быға сабулмаған әрһеҙлек менән тарала башланы. Хәбәр эйәһе менән йөрөмәй. Әммә бер көн килеп махсус рәүештә ғәйбәт таратыусы үҙен фашланы...

* * *

Һуңғы тапҡыр булған класташтар осрашыуына биш йыл үткәс, Кәримдең һабаҡташтары тағы ла осрашты. Тәүҙә улар уҡыған мәктәптәренә инеп, белем алған кластарына инеп ултырҙы. Класс етәкселәре килеп ингән булды. Дәрес башланды. Тәнәфес еткәнен белдереп, ҡыңғырау яңғыраны. Һабаҡташтар артабан үҙҙәрен уҡытҡан башҡа уҡытыусылар, мәктәптә эшләгән хәҙерге коллектив менән рәсми рәүештә осрашып, фотоға төшкәс, класташтар осрашыуының төп өлөшөнә, Һаҡмар туғайына йүнәлде. Кәрим алты балаһын, ҡатынын ултыртып, йылға буйына "Крузак" менән килеп төштө. Барыһының да күҙе дүрт булды. Кемдер биш йыл элекке ваҡиғаны иҫенә төшөрөп:

\- Ысын ир икәнһең, Кәрим. Һүҙеңдә торғанһың. Менгән атын ҡарағыҙ әле, класташтар, Аҡбуҙаттың үҙе бит, - тип әйтеп һалды.

\- Ул тоҡомдарының "ювелир оҫталығы"на хыянат итте. Малайы тыуҙы...

Был һүҙҙең авторы, әлбиттә, биш йыл элек Кәрим менән низағлашҡан Сәмиғулла ине. Маҡтаған Себеренән ғаиләһен ҡалдырып ҡайтып, хәҙер ул ауыл эшһеҙҙәренең командаһын тулыландырҙы. Шул уҡ "Тойота"һында йөрөй. Ауыл егеттәре менән урманға сығып араҡы эсеп, машинаһын ҡайынға төкөтөп, уныһы йәмшәйеп, бысранып бөткәйне. Махсус эшләһәң дә улай килеп сыҡмаҫ: уның машинаһы менән Кәримдеке лә был юлы йәнәш тура килгән.

Барыһы ла Кәримде машинаһы һәм улы менән ҡотланы. Тостар әйтелде. Һабаҡташтар һәр ҡайһыһы айырып һүҙ алып, һуңғы дүрт йылда өлгәшкән уңыштары хаҡында һөйләне. Был йәһәттән дә иң күп маҡтауҙар һәм хуплауҙар Кәримдең адресына йүнәлдерелде. Барыһы ла туҡтауһыҙ Кәрим дә Кәрим дә тип ҡабатлай торғас, быға тиклем әйтер һүҙен тештәрен шығырҙатып уртлап, йотоп торған Сәмиғулла байтаҡ ҡына төшөрөп алғас, бер саҡ телгә килде:

\- Ниңә һеҙ, класташтар, барығыҙ ҙа бер туҡтауһыҙ Кәрим дә Кәрим, тиһегеҙ ул? Унан башҡа беҙҙең арала кеше бөткәнме? Мәҫәлән, бына Өфө авиация университеты профессоры Тәлғәтте, Мәскәүҙә йәшәүсе класташыбыҙ Мусаны алайыҡ. Ниңә улар Кәримдән кәмме ни? Йәиһә, Кәримдең уларҙан ҡайһы ере артыҡ?

Уның һүҙен күтәреп алыусы булманы. Көлдөләр генә. Шулай ҙа ауыл хакимиәте башлығы булып эшләүсе класташтары Мәсҡүҙә дәғүә белдереүсегә яуапһыҙ ҡала алманы.

\- Бер кем дә, бер кемдән дә кәм дә, артыҡ та түгел, Сәмиғулла. Ниңә башыңа эсәһең? Табындың йәмен ебәрмә...

\- Һеҙ бит үҙегеҙ табындың йәмен ебәрәһегеҙ, Мәсҡүҙә. Бына ошонда беҙҙең килгәнгә сәғәткә яҡын ваҡыт үтте, бер туҡтауһыҙ бер кешенең исемен генә ҡабатлайһығыҙ. Нимә, әллә Кәрим Алланың ҡашҡа тәкәһеме?

\- Ҡашҡамы, тәкәме, эш унда түгел, Сәмиғулла. Бында беҙ һуңғы биш йылда өлгәшелгән уңыштар хаҡында һүҙ алып барабыҙ. Кәрим һуңғы биш йылда шәхси хужалығында эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса бер кем дә башҡара алмағанды атҡарҙы. Уның исеме бөгөн районыбыҙ хужаһының ғына түгел, республикабыҙ етәксеһенең дә, ауыл хужалығы министрының да теленән төшмәй. Ышанмаһаң, ана гәзиттәрҙе асып ҡара. Барыһында ла уның хаҡында яҙалар. Ана, ҡарағыҙ ҡыҙҙарына һәм улына. Ниндәйҙәр улар. Шундай хәстәрлекле атайҙар күберәк булһа, илебеҙ бер ниндәй ҙә көрсөккә бирешмәҫ, ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыр инек. Кәрим хәҙерге заман геройы. Беҙгә унан үрнәк алырға кәрәк, ә Сәмиғулла кеүек тар эсләнеп ултырмаҫҡа. Бына минең бөгөн класташыбыҙ Кәримгә бер һорауым да бар. Кәрим, әйт әле, еңел булмаған ошо заманда, өҫтәүенә, ҙур ғаилә башлығы булараҡ, һин ҡайҙан көс алаһың ул? Ошондай тәүәккәл аҙымдар яһарға нимә этәргес көс булды?

Сәмиғулла тағы ла нимәлер әйтергә уҡталды ла, туҡталып ҡалды. Шунан буҙарҙы, Кәрим һүҙ алырға йыйынғас, бупылдап, ауыҙы эсендә бутҡа бешерҙе.

\- Һеҙ бигерәк инде, минән герой яһап ташланығыҙ. Машина һатып алыу ҙа булдымы геройлыҡ? Беҙҙең атай-олатайҙарҙы яҡшы ат менеп йөрөгәндәре өсөн генә батыр тип атамағандар, ил өсөн ҡылған ғәмәленә ҡарап баһа биргәндәр. Был йәһәттән мин бер нәмә лә эшләмәнем әле. Хоҙай һаулыҡ бирһә, ауылда эшһеҙ йөрөгән егеттәргә эш урыны ойоштороорға ине ниәт. Аҡсаны уны шулай эшләйһең инде: мин ҡулыма килеп эләккән тәүге сумма аҡсаны кеҫәгә лә, банкка ла һалып ҡуйманым, тулыһынса эшкә һалдым. Этәргес көскә килгәндә... - Шул саҡ Кәрим Сәмиғулла яғына боролдо. - Сәмиғулла, мин һиңә бөгөн класташтарым алдында оло рәхмәтемде еткерәм. Рәхмәт һиңә! Әгәр ҙә һин теүәл биш йыл элек минең намыҫымды ҡуҙғатмаған булһаң, быларҙың береһе лә булмаҫ ине. Иң ауыр сағымда һине миңә Хоҙай үҙе ебәргәндер...

Ошо ергә еткәс Кәрим туҡталып ҡалды. Тәрән тынлыҡ урынлашты. Класташтары берсә Кәримгә, берсә Сәмиғуллаға ҡарап ҡатып ҡалды. Тынлыҡты буҙарыуы үтеп ағара башлаған Сәмиғулла боҙҙо.

\- Кәрим, минең шулай ҙа һиңә бер тәҡдимем бар. Һин шулай ҙа теге "Пусть говорят" тапшырыуын алып барған Андрей Малаховҡа шылтырат әле. Улар ДНК анализы яһайҙар бит. Юғиһә, "Ювелир оҫталары" йолаһына хыянат итәһең түгелме? Йоморо ҡара малай хаҡында әйтәм... - Сәмиғулла Зөләйханың ҡулындағы Карамға ишараланы.

Кәрим секундтың меңдән бер өлөшөндә башына килгән уйынан осоп китә яҙҙы. Юҡ, бындай ынтылыш ауылда ғәйбәт таратып ятыусының кем икәнен аңлауҙан түгел ине. Хәҡиҡәттең күҙенә туп-тура ҡарағандай булды ул. Шуға күрә һүҙҙәре лә асыҡ һәм ҡәтғи яңғыраны.

\- Миңә малайҙы Хоҙай бирҙе, Сәмиғулла. Һиңә бик тә бик кәрәкһә, бар, Хоҙайҙан анализ ал. Уға икеләнеү белдереп, гонаһка батҡым килмәй минең...

Тағы ла тынлыҡ урынлашты. Ара-тирә теле асылып килгән кескәй Карамдың ауыҙ эсенән генә әсәһенә ниҙер әйтеп маташҡаны ишетелде. Был тынлыҡ тағы ла күпмегә һуҙылыр ине икән, уны һабаҡташтарҙың күмәкләп ҡул сабыуы емерҙе. Сәмиғулла телһеҙ ҡалғайны...

**(Аҙағы. Башы 43-44-се һандарҙа).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТУҒАНЫМ ТИП ӨНДӘШ!




**Әле республикала Башҡортостан Башлығы грантына ойошторолған "Иң матур башҡорт һүҙе" акцияһы бара. Һөйләшеүҙәрҙә бик үк ҡулланылып бармаған, хатта лөғәттән төшөп ҡалған матур башҡорт һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү, ҡулланылышҡа ҡайтарыу өсөн ойошторолған сара был.**

Бер генә күренешкә иғтибар итәйек әле. Аралашыуҙарҙа бер-беребеҙгә, ситтәргә, халыҡ төркөмөнә, хатта иң яҡындарға өндәшеү һүҙҙәре юҡҡа сыға, һиҙәһегеҙме? Хатта атай, әсәй тигән иң мөғжизәле өндәшеүҙе лә "папа, мама"ға алыштырып бөтөп бара милләттәштәр. Бөтөнләй руслашып бөтә яҙғандар ағай, абзый (абыҙ һүҙенән), апай, ҡустым, һеңлем, мырҙам, һылыу, ҡәрендәш тигән һүҙҙәрҙе лә белмәй, үҙенән олоһона ла хатта исеме менән өндәшеүсән.

Ошондай бер-береңә исем менән генә түгел, ә ҡәрҙәшлек, быуындашлыҡ, өлкәнлек, кеселек мөнәсәбәттәрен сағылдырған һүҙҙәрҙе, әлбиттә, хәтергә нығлап төшөрөү кәрәк. Һәм ошондай акциялар шуға булышлыҡ итһен ине. Ошондай һүҙҙәр менән өндәшеүҙәр аша кешеләр бер-береһенә яҡыная, күңелдәрендә матур тойғолар нығына, бер-береһенең генә түгел, ә Хоҙай рәхмәтендә лә булалар, тигәнде онотмаһаҡ ине. Сөнки Хоҙай беҙгә тел биргән, Ул биргәнде һанламау, әлбиттә, оло гонаһ.

Ә был акцияла мин "Туғаным" тигән һүҙҙе айырым баһалар инем. Беҙҙең юрматыларҙа был һүҙҙе теленән төшөрмәгән өлкән кешеләр бар әле. Беләһегеҙме ниндәй йылылыҡ, яҡынлыҡ тойғолары кисерелә был һүҙ һиңә төбәлгәндә. Ысынлап та мөғжизәле өндәшеү ул - "Туғаным".

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

*✓ Рәсәй йән башынан һалым түләтеүгә күсә. Был үҙ сиратында яңы төр бәрәмекте - йән иҫәбен алыуҙы талап итә, Рәсәй дәүләтенең барлыҡ халҡын һалым һалыныусы һәм һалым һалынмаусы өлөштәргә бүлә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# СЕЙӘ ҺУТЫ ЭС!

■ Бөйөк Британияның Нортумбрия университеты ғалимдары асыҡлауынса, сейә һуты күнекмәләрҙән һуң организмды элекке хәленә ҡайтарырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәрҙә 20 спортсы-марафонсы ҡатнаша. Табиптар уларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһенә ике аҙна дауамында сейә һуты эсергән. Һөҙөмтәлә, уларҙың мускулдарында оксидатив стресс түбәнәйеү сәбәпле, сейә һуты эскән спортсыларҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икәнлеге асыҡланған. Ғалимдар быны сейәлә антиоксиданттарҙың күп булыуы менән аңлата.

■ Белгестәр сәләмәтлек өсөн зыянлы булған бер нисә төр кейем-һалым һәм аксессуар билдәләй. Уларҙың береһе - тар джинсылар. Ул ҡан әйләнешен боҙа, һейҙек-ҡыуыҡ системаһы сирҙәренә алып килә. Боттоң эске яғынан үткән нервыларҙы ҡыҫа, һөҙөмтәлә аяҡтар һыҙлай башлауы бар. Шулай уҡ сифатһыҙ бижутерия ла аллергияға алып килеүе ихтимал. Кедылар ҙа һаулыҡҡа насар йоғонто яһай, ти улар. Даими кеды кейеп йөрөүселәрҙә айыу табан сире барлыҡҡа килә.

■ Иртәнге аш майлы аҙыҡтарҙан торорға тейеш, тип белдерә АҠШ-тың Алабама университеты ғалимдары. Мәҫәлән, ҡурылған йомортҡа, бекон сәләмәтлек өсөн иң файҙалы иртәнге аш һанала. Баҡтиһәң, йоҡонан торғас та ашалған туҡлыклы аҙыҡ метаболик синдромдарҙан ҡотҡара һәм көн дауамында матдәләр әйләнеше яҡшы була.

■ Миннесота университеты белдереүенсә, ҡапыл барлыҡҡа килгән баш ауыртыуын кеҫәгеҙҙә ятҡан аҡса баҫа ала. Белгестәр әйтеүенсә, быны өсөн магазинға сығып, әйбер һатып алырға түгел, ә аҡсаларҙы һанау ҙа етә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың бер төркөмө - аҡса, ә икенсеһе киҫелгән ҡағыҙ һанаған. Бынан һуң улар ҡулдарын эҫе һыуға тығып торорға тейеш була. Асыҡланыуынса, аҡса һанаусылар ҡулдарын һыуҙа оҙоғыраҡ тота алған, йәғни улар ауыртыу тойғоһо һиҙмәй башлаған.

■ Американың Эймори медицина мәктәбе иҫәпләп сығарыуынса, оло кеше көн һайын 30-40 ҡалаҡ шәкәр ашай икән. Бында аҙыҡ-түлек һәм эсемлектәрҙәге шәкәр ҙә инә. Рөхсәт ителгән норма 23 ҡалаҡ булғанлыҡтан, белгестәр аҙыҡ-түлектәге шәкәр күләме менән ҡыҙыҡһынырға һәм артыҡ татлы аҙыҡ һәм эсемлектәр менән мауыҡмаҫҡа тәҡдим итә.

■ Швецияның "Төньяҡ-Көнбайыш" психиатрик үҙәге табиптары оҙайлы депрессия кисереүсе кешеләрҙә күҙәткәндән һуң, паник ҡурҡыуҙы һәм депрессияны интернет ярҙамында еңергә мөмкин тиген һығымтаға килгән. Кеше интернетта бындай сирлеләр менән аралашып, бергәләп проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләгәндән һуң, тыныслана икән. Әлбиттә, Бөтә донъя селтәре дарыуҙарҙы алыштыра алмай, әммә интернетты өҫтәмә дауа сараһы итеп ҡулланып була, ти белгестәр.

■ Яңы Зеландияның "Үҫемлектәр һәм аҙыҡтар тикшереү" компанияһы тикшереүселәре иҫбатлауынса, ҡара ҡарағат емештәрендә булған химик берләшмәләр ҡурылдайҙы дауаларға ярҙам итә. Ғалимдар әйтеүенсә, ҡара ҡарағаттың төп элементы - эпигаллотехин иммунитетты ла күтәрә.

ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2021

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

**XVIII быуат урталары - XIX быуат башында Петр Беренсенең әүҙем тышҡы һәм эске сәйәсәте күп финанс сығымдарына килтереүе һөҙөмтәһендә илдә һалым системаһы ҡабаттан ҡаралып, Рәсәй йән башынан һалым түләтеүгә күсә. Был үҙ сиратында яңы төр бәрәмекте - "йән башын ревизиялауҙы", йәғни йән иҫәбен алыуҙы талап итә, Рәсәй дәүләтенең барлыҡ халҡын һалым һалыныусы һәм һалым һалынмаусы өлөштәргә бүлә. Беренсе категорияға крәҫтиәндәр, мещандар, цех һөнәрмәндәре, сауҙагәрҙәр инә. Икенсеһенә - дворяндар, диндарҙар, чиновниктар. Күпме икәнлектәрен асыҡлау өсөн "йән башына ревизия" тип аталған процедурала һалым һалынырға тейешле ҡатламдың ир заттары иҫәбе алынған. Улар йән башына һалым түләп, рекрут хеҙмәтен үтергә тейеш була. Йән иҫәбен алыуҙың беренсе өлгө материалдарын күрһәтеүсе ревизия сказкалары өйәҙ, губерна, дөйөм Рәсәй йомғаҡтары булып дөйөмләштерелә. Һөҙөмтә мәғлүмәттәре "оклад кенәгәләре", "иҫәп алыу кенәгәләре", "исемлек ведомостары" исемен ала. Ревизиялар шулай уҡ һалым түләмәгән кешеләрҙе лә дөйөм иҫәп өсөн иҫәпкә ала. Һалым түләүмәүселәрҙең бер өлөшө (дворяндар, чиновниктар) күпселек ревизияларҙа иҫәпкә алынмай, икенсе өлөшө (регуляр армия һәм флот, сит ил кешеләре) бөтөнөһөндә лә иҫәпкә алына. Бынан тыш, 1, 2, 6-сы ревизиялар ҡатын-ҡыҙҙарҙы иҫәпләмәй. Яңы ревизияға тиклем тәбиғи үҫештәге бөтөн үҙгәрештәр (тыуым, үлем) иғтибарға алынмай. 1718 - 1859 йылдар осоронда барлығы 10 ревизия уҙғарыла. Иҫәп алыу үҙе бер-ике йылға һуҙыла, һуңынан икенсе иҫәп алыуға тиклем ревизиялар үткәрелә. Уның барышында тәүҙә алынған мәғлүмәттәр тикшерелеп, тулыландырыла. Оҙайлы тикшереүҙәр шуны күрһәтә: һалым түләргә тейешле халыҡтың аҙына ғына ҡасып ҡалырға насип була.**

# ТАРИХЫ ШУЛАЙ



## Ун тапҡыр...

**Беренсе ревизия.** Ул 1718 йылдың 26 ноябрендә "Ревизия үткәреү тураһында"ғы указға һәм 1719 йылдың 22 ғинуарында Сенаттың "Һалым түләүсе ҡатлам кешеләренең дөйөм иҫәбен алыу, ревизия сказкаларын биреү, кешеләрҙе йәшереп алып ҡалған өсөн яза тураһында" указы буйынса үткәрелә. Ревизия "армия полктарында бөтөн дәүләттең крәҫтиәндәрен урынлаштырыу маҡсатын" алға һөрә. Ул ете йылдан ашыу (1727 йылға тиклем) бара. Беренсе ревизия Мәскәү, Петербург, Түбәнге Новгород, Ҡаҙан, Архангел, Смоленск, Себер, Аҙау, Киев губерналарында уҙа. Лифляндия (Рига губернаһы), Эстландия (Ревель губернаһы), Малороссия, Слобода Украинаһы был саранан ситтә ҡала. Яулап алынған ҡалаларға, Әстерхан һәм Өфө башҡорттары менән татарҙарына, Себерҙең яһаҡ түләүсе халҡына ревизия үткәрелмәй. Беренсе ревизия күпселек ҡатламдарға йә өлөшләтә, йә тотошлай ҡағыла. Һөҙөмтәлә, ул тәүге һалым түләүселәрҙе иҫәпкә алыу, финанс сиктәрен үтеп, һалым түләүсе һәм түләмәүселәрҙең барыһын да иҫәпкә ала башлай.

**Икенсе ревизия.** 1743 йылдың 16 декабрендәге "Генераль ревизия тураһында"ғы указға ярашлы үткәрелә. Ул 1743-1747 йылдарҙы үҙ эсенә ала. Алдағы халыҡ иҫәбен алыуҙан һуң һәм ошо ревизия һөҙөмтәһендә түләнмәгән бурысты ҡаплатыу юлы аша армияны тотоу өсөн кәрәк булған 5 миллион һумдан ашыу аҡса табыла. Икенсе ревизияны үткәргәндә лә беренсе равизияны үткәреү һөҙөмтәһендә билдәләнгән сказкалар формуляры һаҡлана. Шулай уҡ, беренсе ревизиялағы кеүек, Малороссия, Балтик буйы терррриториялары инмәй, яулап алынған ҡалалар халҡы, Әстерхан һәм Өфө башҡорттары менән татарҙары, Себерҙең "яһаҡ түләүсе сит кешеләре" иҫәпкә алынмай.

**Өсөнсө ревизия.** 1761 йылдың 28 ноябрендә "Яңы ревизия үткәреү тураһында"ғы Сенат указына ярашлы ойоштророла. Уның маҡсаты артабан да йән башына һалым йыйыуҙы дауам итеү була. Алдағы указ буйынса ревизияларҙы һәр 15 йыл һайын үткәреү ҡаралһа ла, өсөнсө ревизия 17 йыл үткәс, 1761 йылдан 1767 йылғаса уҙғарыла. Унда ревизия сказкаларының берҙәм баҫма формаһы индерелә, формуляры үҙгәрә. Был үҙгәрештәрҙе индереү һалым түләүсе йән башына ҡағылышлы һорауҙарға яуап алыу маҡсатынан индерелә. Ревизия сказкаларына һалым түләмәүсе ҡайһы бер ҡатламдарҙы индереү туҡтатыла. Был форма бер ниндәй үҙгәрешһеҙ икенсе ревизияға тиклем йәшәй. Уның төп өлөшөндә сказканы биреүҙең сәбәбе аңлатыла һәм мәғлүмәтте йәшереп ҡалдырғанда ҡаты яза бирергә әҙерлек белдерелә. Был иҫәп алыуҙа ла башҡорттар, Өфө һәм Әстерхан татарҙары, Архангелогород губернаһы саамиҙары иҫәпкә алынмай. Һалым түләмәүсе ҡатламдан регуляр армия һәм флот, диндарҙар, дворяндар, чиновниктар иҫәпләнмәй.

**Дүртенсе ревизия**ны үткәреү 1781 йылдың 16 ноябрендәге "Бөтөн империяла яңы ревизия ойоштороу тураһында"ғы манифестҡа ярашлы иғлан ителә. Уны 1783 йылғаса үткәреү күҙаллана. Маҡсат шул уҡ - һалым түләүсе ҡатлам хаҡында мәғлүмәт туплау. Дүртенсе ревизиянан һуң Рәсәй империяһының бөтә территорияһы ревизиялар менән солғап алына. Бары тик Финляндия, Польша һәм 19-сы быуаттың беренсе яртыһында ғына Рәсәйгә ҡушылған Кавказ аръяғы терррриторияһы ташламаға дусар була. Уларҙың халҡы башҡа юл менән иҫәпләнә. 4-10-сы ревизияларҙа дворяндар, сит ил кешеләре, чиновниктар, регуляр армия һәм флот иҫәпкә алынмай.

**Бишенсе ревизия.** 1794 йылдың 23 июнендә "Дәүләттә яңы ревизия үткәреү тураһында"ғы указға ярашлы башлана. Уның маҡсаты ла алдағыларынығына ауаздаш була. Ревизияны 1796 йылда тамамлау күҙаллана. 1794 йылдың 21 сентябрендә Сенаттың "О напечатании формы ревизской сказки и перечневой ведомости и о рассылке оныхъ во все Губернии для продажи сказо-подателямъ" указы ҡабул ителә. Сказка формаһы дүртенсе ревизиянығына оҡшаш була. Рәсәйҙең барлыҡ территорияһы солғап алына.

**Алтынсы ревизия.** 1811 йылдың 18 майындағы манифест менән иғлан ителә. Уның 1812 йылдың 1 ғинуарына тамамланыуы күҙаллана. Был ревизияның айырмаһы шунда - ул тик ир заттарын ғына иҫәпкә ала. Сказка биреү формаһы ла шуның менән айырыла. Яңы йылға инде йән башынан аҡса йыйыу яңы һөҙөмтәләр буйынса атҡарыла.

**Етенсе ревизия** 1815 йылдың 20 июнендәге манифест менән иғлан ителә. Маҡсаты - 1812 йылғы Ватан һуғышы һөҙөмтәһендә кисерелгән юғалтыуҙарҙан һуң халыҡтың хәлен яҡшыртыу. Ревизия шул уҡ территорияла үткәрелә, яңы ҡушылған территориялар ғына ситтә ҡала.

**Һигеҙенсе ревизия** 1833 йылдың 16 июнендәге манифест буйынса үткәрелә. Ул өс йыл самаһына һуҙыла. Иҫәп алыуға һалым түләүсе һәр кеше йәлеп ителә. Ғөмүмән, Рәсәй империяһы халҡы өс ҙур төркөмгә бүленә. Беренсе төркөмгә бөтөн һалым түләүсе ҡатлам инә. Икенсеһенә иҫәп

өсөн генә кәрәкле төркөм халҡы (руханиҙар, ямщиктар) инә. Өсөнсө төркөмдө ревизияға бөтөнләй индерелмәгән ҡатлам (дворяндар, хәрби хеҙмәткәрҙәр) тәшкил итә. Перепись Финляндия, Польша, Кавказ аръяғынан тыш, бөтөн территорияны солғап ала.

**Туғыҙынсы ревизия** 1850 йылдың 11 ғинуарындағы манифест буйынса уҙғарыла. Ул ике йылға һуҙыла, халыҡ иҫәбен алыу тәртибе үҙгәрешһеҙ ҡала.

**Унынсы ревизия**ны үткәреү тураһындағы манифест 1856 йылдың 26 августында сығарыла. Әммә ревизия 1857 йылдың 3 июнендә, уның ентекле уставы баҫылып сыҡҡас, башлана. Ҡырым һуғышы һөҙөмтәһендә халыҡ иҫәбендә һәм составында ҙур үҙгәрештәр була. Туғыҙынсы ревизия мәғлүмәттәре һалым йыйыуға ярашлы булмай сыға. Ревизия тик 1862 йылда ғына тамамлана. Ул Польша, Финляндия, Кавказ аръяғы һәм Көньяҡ Бессарабия (1856 йылда ул Румынияға күсә) территорияларынан тыш, илдең бөтөн территорияһында ла үтә.

### Рәсәй империяһының беренсе дөйөм халыҡ иҫәбен алыу

Рәсәй империяһында 28 ғинуарҙа беренсе дөйөм халыҡ иҫәбен алыу 1895 йылдың 5 июнендә раҫланған ҡарар нигеҙендә үткәрелә. Ул, Финляндиянан тыш, бөтөн территорияны ялмап ала. Өфө губернаһында ла уҙғарыла.

1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу халыҡ-ара статистика ойошмаларының күрһәтмәләренә һәм башҡа илдәр тәжрибәһенә таянып үткәрелә. Халыҡ иҫәбен алыуға П. П. Семенов-Тянь-Шанский етәкселегендәге Үҙәк статистика комитеты алып барған ҙур күләмле ойоштороу эштәре этәргес бирә. 1870 йылда уның инициативаһы буйынса Бөтә Рәсәй статистика съезы уҙа, унда халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреү мәсьәләләре ҡарала. 1874 йылда уның тарафынан "Халыҡ иҫәбен алыуҙы үткәреү тураһында положение проекты" әҙерләнеп, Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыу буйынса комиссияға тапшырыла. 1895 йылда был документ раҫлана.

Кампания башында эске эштәр министры етәкләгән Баш перепись комиссияһы тора. Урындарҙа губернаторҙар йәки дворянлыҡтың өйәҙ етәкселәре торған перепись комиссиялары ойошторола. Программа үҙ эсенә 14 һорауҙы ала: 1. Фамилия, исем, атаһының исеме. 2. Енес. 3. Яҙылған кеше хужалыҡ башлығына һәм үҙ ғаиләһенең башлығына кем була. 4. Йәше. 5. Ғаилә хәле. 6. Ҡатламы. 7. Тыуған ере. 8. Теркәлеү урыны. 9. Йәшәгән урыны. 10. Урында булмауы, ҡайҙалыр китеүе йәки ваҡытлыса йәшәүе тураһында билдә. 11. Тотҡан дине. 12. Туған теле. 13. Белеме. 14. Шөғөлө.

Халыҡ иҫәбен алыу өс төрлө иҫәп ҡағыҙҙарында алып барыла: 1. А формаһы - крәҫтиән хужалыҡтары өсөн. 2. Б формаһы - биләмә башлыҡтары өсөн. 3. В формаһы - ҡала халҡы өсөн. Был формалар беренсе биттең йөкмәткеһе буйынса ғына айырыла, ә эске биттәрҙең барыһы ла бер төрлө була.

Ауыл ерҙәрендә халыҡ иҫәбен алыу айырым хужалыҡтар буйынса үткәрелә, йәғни һәр хужалыҡҡа бер иҫәп ҡағыҙы тултырыла. Уға хужалыҡ составына ингән кешеләр ҙә, иҫәп алыу ваҡытында унда ваҡытлыса булғандар ҙа теркәлә. Һәр айырым хужалыҡта ғаиләнең бөтөн ағзалары ла, шулай уҡ туғандары һәм хужаға буйһоноулы булған һәм уның менән йәшәгән башҡа кешеләр ҙә инә. Яңғыҙаҡтарға айырым иҫәп ҡағыҙы тултырыла.

Ҡалаларҙа иҫәп алыу айырым фатирҙар буйынса үткәрелә.

Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре 1897 йылдың 28 ғинуарына билдәләнә. Был переписта иҫәпсе ике тапҡыр йөрөп сыға: беренсеһе билдәле датаға тиклем, икенсеһе - унан һуң. Беренсе тапҡыр йөрөп сыҡҡанда ул формулярҙар тултыра, икенсеһендә ошо осор эсендә булған үҙгәрештәрҙе индереп, иҫәп ҡағыҙына төҙәтеүҙәр индерә.

1897 йылғы иҫәп алыуҙың маҡсаты өс категория - бөтөн булған, даими йәшәүсе, теркәлеүсе - халыҡты иҫәпләү. Уның етешһеҙлектәре лә була. Программала милләтте һәм синыфты (социаль сығыш) билдәләүсе һорауҙар булмай, ә инде белем тураһындағы һорау уҡыу урынын асыҡлаусы һорау менән берләштерелә. Халыҡ иҫәбен алыу Рәсәйҙең ситендәге халыҡтарҙы тулыһынса теркәмәй. Статистиктарҙың иҫәпләүенсә, Себерҙең ҡайһы бер халыҡтары 30 процентҡа тиклем иҫәпкә алынып бөтмәгән. Шуға ҡарамаҫтан, Рәсәй тарихында халыҡтың дөйөм иҫәбен алыуҙың, һис һүҙһеҙ, әһәмиәте ҙур. Уның һөҙөмтәләре губерналар буйынса 119 томда, дөйөм империя һөҙөмтәләре 2 томда баҫылып сыға.

Өфө губернаһы буйынса 1901 һәм 1904 йылдарҙа Н. А. Тройницкий редакторлығында "Эске эштәр министрлығының Үҙәк статистика комитеты дәфтәрҙәре" нәшер ителә. Унда тел принцибы буйынса халыҡтың бүленеше хаҡында ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар.

Өфө губернаһында туған теле тип:

Башҡорт телен - 454361 ир-ат, 445549 ҡатын-ҡыҙ;

Урыҫ телен - 402312 ир-ат, 431823 ҡатын-ҡыҙ;

Татар телен - 94642 ир-ат, 90175 ҡатын-ҡыҙ;

Мишәр телен - 10414 ир-ат, 10543 ҡатын-ҡыҙ;

Типтәр телен - 20352 ир-ат, 19603 ҡатын-ҡыҙ;

Мордва телен - 18224 ир-ат, 19065 ҡатын-ҡыҙ;

Сирмеш телен - 39618 ир-ат, 40990 ҡатын-ҡыҙ;

Сыуаш телен - 30248 ир-ат, 30368 ҡатын-ҡыҙ;

Вотяк телен 11451 ир-ат, 11050 ҡатын-ҡыҙ атаған.

Абсолют халыҡ һаны буйынса Өфө губернаһы империяла күп халыҡлылар рәтенә инә. 1897 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса унда ике енестәге 2196642 кеше йәшәгән.

**Архив мәғлүмәттәре буйынса.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



## ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 46-сы идея
### Үҙ-үҙеңде тота белеү

Египеттың Фиваид сүллегендә, уның ҡап уртаһында, һыуҙан бик алыҫта миндаль ағасы үҫә. Әйе, миндаль ағасы - иң ҡаты, кеше йәшәмәгән сүллек уртаһында. Был ағас - үҙ-үҙеңде тота белеү емеше.

346 йылда ҡарт монах Абба Амой үҙ уҡыусыһы менән сүллектә намаҙ уҡый. Ул уны үҙ-үҙеңде тота белеү емештәре нимәнән ғибәрәт булыуын аңларға өйрәтә, әммә уҡыусыһы уның өгөт-нәсихәттәрен бер нисек тә аңлай алмай. Шул саҡ монах миндаль ағасы ботағынан яһалған таяғын ала ла, уны ҡомға ҡаҙап ҡуя һәм Бәләкәй Джон исемле уҡыусыһына: "Ошо таяҡҡа емеш биргәнсе һыу һип тә һип, шул саҡта ғына минең нимәне күҙ уңында тотоуымды аңларһың", - тип әйтә. Был урындан иң яҡын ҡоҙоҡҡа тиклем байтаҡ саҡрым булған, ләкин төнөн бер аҙ һалҡынайтҡас, Бәләкәй Джон ҡоҙоҡ эргәһенә барып етә лә, кувшинын тултырғансы һыу алып килеп, таяҡ төбөнә һыу ҡоя. Ул өс йыл буйына һәр төн һайын шулай эшләй. Был ваҡыт үтеүгә шытымдар ебәргән таяҡ емеш бирә башлай. Һәм Бәләкәй Джон миндаль бөртөктәрен монастырға килтерә лә монахтарға: "Үҙ-үҙеңде тота белеү емештәрен күрегеҙ!" - ти.

Бөгөн һин ниндәйҙер сүллектә йәшәмәйһеңме? Үҙеңде сүл уртаһында йәшәгәндәй тойорға мәжбүр итеүсе төрлө сирҙәргә, яңғыҙлыҡҡа, ғаилә һәм эш проблемаларына, аҡса етешмәүгә тарымаһыңмы?

Улайһа, мин һиңә үҙ һүҙемде әйтәйем: был сүллектең миндаль ағасы кеүек сәскәгә күмелеүе һәм үҙ-үҙеңде тота белеү ярҙамында емеш биреүе ихтимал. "Үҙ-үҙеңде тота белеү" тигәндән, мин аң дисциплинаһын күҙ уңында тотам.

Бәләкәй Джон кеүек эш ит. Үҙ уйҙарыңды даими күҙәтеп бар һәм үҙеңде тик яҡшылыҡ тураһында ғына уйларға күнектер, көйлә. Еңелеү тураһындағы һәм башҡа теләһә ниндәй кире уйҙарҙан баш тарт. Аңыңды һөйөү, сәләмәтлек, шатлыҡ, тыныслыҡ һәм гармония тураһындағы уйҙар менән һуғар. Шул саҡта һин үҙ-үҙеңде тота белеү сәскәләренең емештәрен алырһың һәм үҙең йәшәгән сүллектә күҙ күрмәгән һәм ишетелмәгән сәскәләргә күмелгән баҡсаға әүерелдерерһең.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

### Изгелегең үҙеңә ҡайта

"Берҙән-бер көндө мин үҙемдең дөйә көтөүенә барҙым, мал-тыуарҙың көр, сәләмәт, елендәре һөт менән тулы икәнен күргәс, үҙемдең яратҡан бер инә дөйәмдә ярлы ғына йәшәгән, ете ҡыҙ бала аҫыраған күршемә бирмәк булдым. Ишеген туҡылдаттым, ул асты. "Был инә дөйә минән бүләк булыр," - тинем. Ул шул тиклем нық аптыраны, хатта ки телһеҙ ҡалды. Дөйә уларға бик тә ярап ҡалды, улар уның һөтөн файҙаландылар. Күршем дөйәне егеп, утын ташый башланы, ә элек үҙ арҡаһында артмаҡлап торғайны.

Яҙ үтте, йәй ҡоро килде. Бәҙәуиндар көтөү өсөн утлау һәм һыу эҙләп, сүллек буйлап күсенеп йөрөй башланылар".

Ибн Гудаан артабан дауам итә: "Мин дә өс улым менән ер аҫты һыуы эҙләп, сүллеккә сығып киттем. Ахыр, бер мәмерйәгә төштөм. Улдарым өҫтә ҡалды. Ер аҫты юлында йөрөй торғас, аҙаштым да ҡуйҙым".

Улдары атайҙарын мәмерйә ауыҙында өс көн буйы көтәләр. Шунан, атай аҙашып астан үлгәндер, тип уйлайҙар. Ысынбарлыҡта, йорт мөлкәтен үҙ-ара бүлешеп алғылары килеп, был уландар аталарының үлемен теләгән булалар. Тиҙерәк ҡайта һалалар ҙа, донъяны бүлешә башлайҙар. Улар хатта аталарының бер инә дөйәне күршеләренә биргәнен дә онотмайҙар. Янап, ҡурҡытып, малды кире биреүен талап итәләр. Күршеләре: "Был ҡылығығыҙҙы атағыҙға әйтәм", - ти. Егеттәр: "Ул үлде", - тип яуап бирәләр. "Нисек? Үлде, тиһегеҙме? Улайһа, миңә үлгән урынын күрһәтегеҙ!" "Ул һыу эҙләп, ер аҫты мәмерйәһенә төшеп китте лә, шунан сыға алманы", - ти Ибн Гудаандың улдары. Күрше: "Улайһа, алығыҙ дөйәне. Миңә уның кәрәге юҡ. Тик мине мәмерйәгә алып барығыҙ", - ти.

Егеттәр уны мәмерйәгә алып баралар ҙа, шунда ҡалдырып китәләр. Күрше үҙе менән арҡан алған була, сыра яндырып, ер аҫтына төшеп китә. Икһеҙ-сикһеҙ юлдар буйлап бара торғас, бер заман һыу еҫен тойоп ҡала. Хатта ыңғырашҡан тауыш та ишеткәндәй була. Шул яҡҡа табан ашыға һәм бер кеше кәүҙәһенә барып юлыға. Усын тегенең танау тәңгәленә ҡуйып, тын алғанын асыҡлай. Шунан дөм ҡараңғыла оҙаҡ булып, яҡты күрмәгән күҙҙәре һуҡырайыуынан ҡурҡып, уның күҙҙәрен сепрәк менән бәйләй. Шунан сығыу яғына ҡуҙғалалар. Күршеһе бына шулай Ибн Гудаанды ҡотҡара. Хөрмә ашатып, йөкмәп, өйөнә алып ҡайта. Ибн Гудаан әкренләп һауыға башлай.

Күршеһе бер саҡ унан: "Ибн Гудаан, упҡын төбөндә нисек иҫән ҡала алдың ул?"- һорай."Сығыу юлын тапмай аҙашҡас, һыуһап үлмәҫ өсөн, ер аҫты шишмәһе эргәһендә туҡталдым. Тик һыу менән генә тук булып булмай, өс көн үтеүгә ныҡ асыҡтым. Аллаһы Тәғәләгә тапшырылып, ҡаҡ салҡан яттым, Уның мине бәләнән ҡотҡарасағына шик тотманым. Бер заман ауыҙыма һөт тамсылары тамғанын тойҙом. Тороп ултырҙым, ләкин эргә-тирәмдә бер нәмә лә юҡ ине, бары дөм ҡараңғылыҡ ҡына. Мин ауыҙым эргәһендә һөт һалынған туҫтаҡ йөрөгәнен аңғарҙым, туйғансы һөт эстем. Өс көн буйы мин ошо аҡ ризыҡ менән туҡландым, шулай ҙа ике көн элек һөт юҡҡа сыҡты. Ни өсөн икәнен аңламаным", - тип яуап бирә Ибн Гудаан. "Мин уның сәбәбен һиңә аңлата алам, - ти күршеһе. - Улдарың һине ер аҫтында ҡалып үлде, тип уйлаҕылар. Ике көн элек улар өйөмә килеп, һин бүләк иткән инә дөйәне минән алып киттеләр. Һин ер аҫтында эскән һөт - ана шул инә дөйәнеке була инде. Шул хаҡ, мосолмандар үҙҙәре биргән саҙаҡа ҡулағаһендә ышыҡта булырҙар".

Әнәс бин Малик (р.ғ) Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с) шундай һүҙҙәрен еткерә: "Изге эштәр кешене насар һәм алама үлемдән, ҡазанан, ауырыуҙан һәм һәләкәттән һаҡлай. Шул хаҡ, был донъяла изгелек итеүселәр - мәңгелек донъяла ла изгелек итеүселәр".

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**

✓ *Был тарихыбыҙҙың байлығын һәм телебеҙҙең күркәмлеген күрергә, телмәрҙе байытырға мөмкинлек бирәсәк. Әлеге һүҙҙәрҙең йәнә лөғәтебеҙгә ҡайтыуы, йәмәғәт тормошо өлкәләрендә файҙаланылыу мөмкинлеге лә бар.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҺЫУҘАН ҮТКӘН ҠЫЙЫҠ КӘМӘ ТӨҪЛӨ, ЭҘҺЕҘ ҮТМӘ ҒҮМЕР ЮЛЫҢДЫ!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**44-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡудаш. Ямантау. Авангард. Ҡасҡын. Әсбап. Метр. Ләстит. Осло. Зраза. Киле. Тати. Оҫта. Лампас. Есаул. Взвод. Азат. Трос. Рус. Үләт. Хәй.

**Вертикаль буйынса:** Әхмәҙиев. Амбразура. Парабола. Ялан. Зәйтүн. Гимн. Умарта. Автор. Оят. Урт. Дәрес. Вепс. Штамп. Әсә. Ҡотлогилдина. Кәмит. Ҡарт. Нефтсе. Сәс.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9 (23) дүшәмбе | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 10 (24) шишәмбе | 7:10 | 8:40 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 11 (25) шаршамбы | 7:12 | 8:42 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 12 (26) кесе йома | 7:14 | 8:44 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |
| 13 (27) йома | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |
| 14 (28) шәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 15:42 | 17:12 | 18:42 |
| 15 (29) йәкшәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 15:41 | 17:11 | 18:41 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ТӘКӘББЕРЛЕК

**Тәкәббер кешенең тышҡы йөҙө түбәндәгесә:**

"Кем икәнлегемде күрегеҙ!"- тигән кеүек атлап йөрөү; Кешеләрҙе нахаҡҡа рәнйетеү һәм шуның өсөн үҙенде ғәйепле тоймау; Кеше менән һөйләшкәндә маһайыу, эреләнеү; Башҡаларҙан айырылып тороу маҡсатында үҙенсәлекле кейем һайлау; Маҡталыуға ынтылыу; Бөтә йәһәттән дә беренсе булырға тырышыу; Тәкәббер кеше үҙен бик сибәр, оҫта, булдыҡлы итеп тоя.

**Тәкәбберлек килтергән һөҙөмтәләр:**

Тәкәббер кеше Ислам диненән дә, Ҡөрьәндән дә, Бәйғәмбәр сөннәтенән дә файҙа алмаясаҡ; Кешенең йөрәгендә тыныслыҡ юҡ. Аллаһ әйткән: "Тәкәббер кеше бер ҡасан ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисермәйәсәк"; Тәкәббер кешене һәр ваҡыт проблемалар һәм уңайһыҙ хәлдәр оҙатып килә; Тәкәбберлек тойғоһо кешене тамуҡҡа илтеүе лә бар. Аллаһ тамуҡта йәшәүселәр тураһында һөйләгәндә, улар араһында тәкәббер кешеләрҙең дә йәне барлығы хаҡында әйтеп киткән.

*СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ.*

# ИҢ МАТУР ҺҮҘЕБЕҘ...



**Башҡортостанда дөйөм халыҡ проекты башлана, унда республикабыҙҙа һәм республиканан ситтә йәшәүселәр ҡатнаша ала.**

Тауыш биреү ике этапта ойошторола: 1-15 ноябрҙә bashslovo.ru сайтында матур яңғырашлы һүҙ тәҡдим итергә кәрәк; 22 ноябрҙә сайтта йыш тәҡдим ителгән 12 һүҙ һайлап алына һәм тауыш биреү башлана; 14 декабрҙә - Башҡорт теле көнөндә иң матур һүҙ иғлан ителә.

"Башҡортостан халҡы тәҡдим иткәндәр араһында һирәк ҡулланылған һүҙҙәр ҙә осраясаҡ, әлбиттә. Был тарихыбыҙҙың байлығын һәм телебеҙҙең күркәмлеген күрергә, телмәрҙе байытырға мөмкинлек бирәсәк. Әлеге һүҙҙәрҙең йәнә лөғәтебеҙгә ҡайтыуы, яңы рестfrандар, күңел асыу, балалар уҡыу үҙәктәре, парктар нейминггында һәм йәмәғәт тормошо өлкәләрендә файҙаланылыу мөмкинлеге лә бар", - ти проект авторы - режиссер, продюсер, "Телешко" балалар телевидениеһы мәктәбе директоры Рөстәм Аҙнабаев. Проектты ойоштороусылар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы хеҙмәттәшлегендә "Медиаформат" балалар-үҫмерҙәр үҙәге, "Телешко" балалар телевидениеһы мәктәбе. Уға республика Башлығы гранты аҡсаһы бүленгән.

# ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ




**Мәскәүҙә, Башҡортостан Республикаһының Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә, "Йәшлек шоу-2020" Бөтә Рәсәй йәштәр фестивалендә ҡатнашыу өсөн йәш эстрада башҡарыусыларын һайлап алыу этабы уҙҙы.**

Һайлап алыу этабында Шафиҡ Баҡтыбаев (беренсе урын), Алтынай Заһитова (икенсе урын) һәм Лия Мөхәмәтова (өсөнсө урын) еңеү яуланы.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Йәшлек-шоу" башҡорт йыры фестивале 28-се тапҡыр уҙғарыла. Һайлап алыу турҙары Рәсәйҙең туғыҙ төбәгендә һәм Башҡортостандың бер нисә зонаһында ойошторола. Проект еңеүсеһенә 300 мең һум аҡса һәм ҙур сәхнәгә сығыу өсөн тәжрибәле продюсер менән контракт тапшырыла. "Йәшлек шоу-2020" фестиваленең продюсеры - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Рөстәм Ғиззәтуллин. Проекттың жюри ағазалары иҫәбендә башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары бар. Фестивалде ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге.

# ҺЫЛЫУҠАЙҘАР ҠАЙҘА?




**Ҡурған өлкәһендә "Һылыуҡай-2020" Бөтә Рәсәй башҡорт һылыуҙары конкурсының төбәк этабы уҙҙы. Сафакүлдәге кастингта Ҡурған өлкәһенең төрлө райондарынан башҡорт ҡыҙҙары ҡатнашты.**

Республика халыҡ ижады үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, Бөтә Рәсәй конкурсының сираттағы финалсыһы - Сафакүл ауылынан Регина Яҡупова. Ул төбәк этабында Гран-при яуланы. Беренсе урынды - Субботино ауылынан Диана Ишкилдина, икенсе урынды Сафакүлдән Юлиә Камалова алды, өсөнсөлә иһә Юлиә Кинйәбулатова (Сафакүл ауылы). Конкурс финалына сыҡҡан ҡыҙҙар өсөн хореография, вокал, актер оҫталығы, подиум хореографияһы, визаж буйынса белгестәр менән дәрестәр ойошторола, костюм һайлауҙа ярҙам күрһәтелә. Финал 3 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була, унда иң сибәр һәм һәләтле ҡыҙҙар төп башҡорт һылыуҡайы исеме өсөн көрәшә. Еңеүсегә төп бүләк - автомобиль.

ШАҒИР ҺҮҘЕ

Тамара ИСКӘНДӘРИӘ

# КЕШЕЛЕКТЕҢ ЗАҢЫН, МИЛЛӘТ АҢЫН

## Ныҡытырҙар тәрән тамырҙар



### Шәжәрә

Дауылдарға күпме ҡаршы торҙо,
Ҡалғанмы ул әллә шөп-шөрә -
Быуаттарҙан-быуаттарға илтер
Тоҡом ағасыбыҙ Шәжәрә?

Кемдәр килгән ергә, кемдәр киткән...
Дәүерҙәрҙе алып иненә,
Нәҫел ағасының һәр ботағы,
Һәр япрағы, ялтлап, күренә...

Кешелектең заңын,
Милләт аңын
Ныҡытырҙар тәрән тамырҙар.
Тарихтағы тыуған түгелбеҙ беҙ!
Вариҫтар ҙа быны танырҙар.

Күкрәп сәскә атыр ағасыбыҙ,
Япраҡ ярып йәнә йөшәрә.
Мәңгелектә ҡалған яҡты эҙең -
Рухың бағанаһы
Шәжәрә!

### Үҙаң

Һәр быуындың үҙ ҡырғыны,
Һәр замандың үҙ заңы.
Уянмай ҙа ҡалыуы бар
Йөрәгендә үҙаңы.

Дауыл булып киләме ул,
Шылышамы ул ҡырғын?
Ҡурҡыу булып күңелдәргә
Йылышамы ул ҡырғын?

Илдәр араһында сиксе
Бикләрме икән ҡырғын?
Әҙәм балаһының рухын
Бөкләрме икән ҡырғын?

Тәбиғәт түҙҙе, түҙҙе лә
Тыуҙырҙы мәллә афәт?
Кескәй вирус гәскәренән
Котәбеҙме һәләкәт?

Эй, һин, Кешем, турайт инең,
Ишет замандың саңын:
Ҡотондо ҡайтар иленә!
Ҡайтар йәнгә үҙ аңын!

Ә нимә ул үҙаң, Кешем?
Милләтте билдәләүме?
Кешелекте аҡ, ҡарағa,
Һарыға бүлгеләүме?

Милләтте лә билдәләй ул,
Айыра ул телде лә.
Хуш еҫтәрен бөркөттөрөп,
Терелтә ул гөлдө лә!

Бөйөк ҡөҙрәт эйәһенә
Өндәшәйек бергәләп:
Үҙаңыбыҙ - һин ул, Раббым,
Итә күрмәсе һәләк!

Итә күрмәсе һәләк.

* * *

Урлашып өйрәнгән кеше
Бурлығында оҫтара.
Уғрылыҡҡа мең аҡланыу,
Мең сәбәбен ул таба.

Урлашып өйрәнһә кеше,
Ғәрләнәм унан ғәйре.

Ҡулынан тотһалар хатта,
Танымаҫ ул ғәйебен.

Урлашып өйрәнгән кеше
Төрәнһә малға, данға,
Йәмғиәт бит эстән серей,
Йәмғиәт бата ҡанға.

Урлашып өйрәнгән кеше
Әйҙәй алдаҡсылыҡҡа.
Илде бәләгә килтерер,
Ялған менән солоҡҡа.

Урлашып өйрәнгән кеше
Бутар ил ҡиммәттәрен.
Үҙе лә һиҙмәй, изге, тип
Иблис тыуын күтәрер.

Урлашып өйрәнмә, Кешем!

### Йәшә, шихан!

Был көндәрҙә эпос күҙен асты -
Урал батыр үҙе ҡуҙғалды.
Миллионлаған халыҡ ауыҙынан
Тәү бәйгәмбәребеҙ һүҙ алды!

Хаҡлыҡты бит ваҡлап турап булмай,
Ул була ла,
Йә булмаһа - юҡ.
Тау хәтле лә тауҙы һанламаған
Булырбыҙмы аңһыҙ халайыҡ?
Юҡ!

Әлмисаҡтан,
Йәнбирҙекәй менән
Уны төйәк иткән Йәнбикә.
Аманатты боҙмай һаҡлағыҙ, тип,
Еткәндә лә һуңғы бер сиккә,

Ҡалдырғандар улар был тауҙарын,
Йылғаларын, яҡты күлдәрен.
Миллион тамаҡ төптәренән сыҡҡан
Ишетегеҙ Урал һүҙҙәрен!

"Кеше - түгел мәңгелек йән,
Түгел ул Хан!
Тереһеүҙы бөрктөм һиңә,
Йәшә, шихан!"
Йәшә, шихан!

* * *

Нишләй?
Әҙерһеңме?
Ирек еле
Күкрәгеңде һинең һуғара.
Асыҡ орбитаға сыҡҡан саҡта
Мең-мең төрлө
Уй-хистәрем минең болара.

Юҡ, юҡ! Артҡа, тиҙәр аяҡтарым,
Унда ҡала әҙер таҡталар!
Унда өйрәнелгән таҡыр һуҡмаҡ,
Унда күнегелгән ҡапҡалар!..

Был ни ғилла?
Азатлыҡмы ошо?
Үҙ йәнемдә минең ихтилал.
Сылбырынан ҡалған торна ише
Сабырһыҙланмасы тоҡтомал!

Ирекле йән булып тыуғанмын мин,
Ҡырағай ел аса күкрәкте:
Һаумы, тормош!
Һинең аҫау холоҡ
Бойондороҡһоҙға өйрәтте!

### Көн

Бөгөнгә көн оломо,
Көн - дәүерҙең ҡоломо?
Көн- тик япраҡ, ағастың
Күккә ашҡан олоно!

Йә, ни ғәжәп: япрағын
Өҙөп ал - ҡалтыранып,
Ағас үҙе һыҙлана,
Һыҙлана бит тупрағын!

Йәшеллектең йәне юҡ,
Тиеүсенең йүне юҡ.
Тоя белә ағас та,
Һөйләшмәгән көнө юҡ.

Тоя белә дәүер ҙә
Ниҙәр булғанын Ерҙә!
Көн дә хәтерен барлай,
Юҡ уның өсөн сер ҙә...

Көнөндән ауырлығы -
Быуаттың ауыҙлығы.
Көндә үҙең енеләйт,
Ятма балауыҙ һығып!

### Былбыл моңо

Сутылдығы ғына сыға инде!
Өҙҙөрә лә таңда һандуғас!
Отоп ҡына алыр инем дә бит,
Онотормон инде таң тыуғас.

Онотормон.
Ошо тиклем дә йән
Тулһа, тулыр икән илһамға?
Арымай ҙа талмай ҡошсоҡҡайым,
Ҡоя ғына тулы мөхәббәтен
Донъяны бар иткән Йыһанға...

Былбыл моңон нисек аңлатырға?
Нисек аңлатырға был йәнде?
Һүҙҙәр көсһөҙ, улар ярай бары
Тасуирларға күргән-белгәнде,

Ә тойғондоң үрен, тәрәнлеген,
Хистәренден урғып ташыуын
Һөйләп бирер өсөн кәрәктер ул
Өҙөп ташлау һүҙҙәр тышауын!

Эйе! Уттар сәсеп тояҡтарҙан,
Көмөш яллы аттар сапҡандай.
Тулҡындарын ҡапыл ярға бәреп,
Йә бәүелеп, дарья аҡҡандай...

Туған телем!
Һандуғастың моңо,
Өҙөлмәҫ бер йыры былбылдың!
Тормош һинән мең ҡат айырһа ла,
Ҡанаттарҙы мең ҡат ҡайырһа ла,
Мең дә бер ҡат һиндә табылдым,
Мин яңынан һиндә табылдым!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАЛЫҠ ҠУРҠА ИКӘН...

## үҙенә ҡоллоҡ быуғаҙары сүкей

Ҡоллоҡ кешене шул тиклем дәрәжәлә кәмһетә, күнеленә ҡоллоҡ инеп урынлашҡан кеше тора-бара хатта үҙенең быуғаҙарын ярата башлай.

**(Л. Вовенарг).**

Иң ҡурҡынысы - бәләкәй кешенең оло власы.

**(И. Шевелев).**

Тотош халыҡтың ҡурҡаҡлығы - уның өсөн ҡоллоҡ быуғаҙары сүкеү мөмкинлегенең иң төп шарты.

**(Ж. Марат).**

Кем күпте теләй, ул үҙ ғүмерен көтөүҙәр менән үткәрә; ә кемдең теләктәре юҡ, ул бары тик үлем көтә.

**(П. Буаст).**

Үҙ милкең менән иртәгә донъя ҡуйырға әҙерләнгән кеше кеүек файҙалан, үҙ байлығыңды оҙаҡ йәшәргә йыйынған кеше һымаҡ һаҡла. Ошоларҙы иҫеңдә тотоп, һаранлыҡ менән йомартлыҡ араһындағы урталыҡта ҡала белгән кеше - иң аҡыллыһы.

**(Лукиан).**

Кем байлығы булып та, уны башҡалар менән дә бүлешмәй, үҙе өсөн дә тотонмай, ул, баҫыуҙа сит кешенең игенен һаҡлаған һалам ҡараҫҡы кеүек, бер нимәгә лә эйә түгел.

**(Һинд мәҡәле).**

Кеше донъяға килгәндә устарын йомоп килә - бар донъя минеке, йәнәһе. Донъянан киткәндә кешенең устары асыҡ була - ҡарағыҙ, үҙем менән бер ни ҙә алмайым, йәнәһе.

**(Талмуд).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡыусы уҡытыусыһына йүгереп килеп инә лә:**
**- Уҡытыусым, сит илдәге сауҙа буйынса бер консультант аҙна һайын гәзиттә рубрика алып бара һәм һинең фекерҙәреңде урлай! - ти.**
**- Әйт әле, ә ул минең фекерҙәрҙе ныҡ боҙамы?**
**- Юҡ. Шул илдә йәшәгән дуҫым миңә мәҡәләләрҙе тотош уҡып сыҡты. Әйтерһең дә, һин яҙған кеүек, тик ул кеше һеҙҙең фекерҙәрҙе үҙ исеме аҫтында сығара. Улай бит ярамай! Нимә эшләргә уйлайһың, уҡытыусым?**
**- Ә ни өсөн мин нимәләр эшләргә тейеш?**
**- Был кеше бит һинең фекерҙәреңде урлай. Белдекһеҙ булһа ла, үҙен аҡыллы итеп күрһәтә, һинең аҡылыңды файҙалана!**
**- Ләкин минең аҡылым бит кәмемәй, әллә мине ахмаҡлана бара, тиһеңме? - тип көлә уҡыусыһынан уҡытыусы".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
6 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3007
Заказ - 902/11